Почтальондар иғтибарына! Матбуғат баҫмаларының гәзит уҡыусыға бары тик почта хеҙмәткәрҙәре фиҙаҡәрлеге менән барып етеүен беләбеҙ, уларҙың хеҙмәтен юғары баһалайбыҙ. 2014 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу барған әлеге мәлдә почтальондарға шундай тәҡдим: кем дә кем 50-80 дана "Киске Өфө"гә яҙҙыра, улар беҙҙең матур бүләктәргә (кәрәҙле телефон, микротулҡынлы мейес, электр ит турағысы, блендер һ. б.) лайыҡ буласаҡ. Бүләктәрҙе алыу өсөн почтальондың үҙе яҙҙырған квитанцияларҙың күсермәләрен редакцияға ебәреүе шарт.


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7 - 13 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№49 (571)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бөгөнгөгә - битараф...** киләсәккә вайымһыҙ халыҡ булмайыҡ! **3**





**Ҡул көсөнә шөкөр -** геүләтеп донъя көттөрә **6**





**Мәңгелек менән даулашырға ярамай,** йәғни тағы ла "Өфө-II" ҡаласығы тураһында **8-9**





**Шүлгән-таш тураһында...** имеш-мимештәр **13**





**14** **ТВ-программа**


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Беҙҙә бөгөн граждандар РФ һәм БР Конституциялары тарафынан гарантияланған хоҡуҡтары менән тулыһынса файҙалана аламы? Кеше хоҡуҡтарын һанламау йәки боҙоуҙың ниндәй осраҡтары йыш ҡабатлана?

*Рим КӘЙҮМОВ, Башҡортостан Республикаһында Кеше хоҡуҡтары буйынса уполномоченный:* Республика граждандары беҙгә төрлө инстанциялар аша үтеп тә тейешле һөҙөмтә булмағанлыҡтан, үҙ хоҡуҡтарын яҡлауҙы һорап, ғәҙеллек юллап мөрәжәғәт итә. Беҙ бер генә мөрәжәғәтте лә иғтибарҙан ситтә ҡалдырмаҫҡа тырышабыҙ. Республикабыҙ халҡы өсөн үҙҙәренең социаль-иҡтисади хоҡуҡтарын ғәмәлгә ашырыу иң мөһим мәсьәләләрҙең береһе булып тора. Кешеләрҙе эшһеҙлек, эш хаҡының ваҡытында түләнмәүе, предприятиеларҙың көрсөккә терәлеүе сәбәпле килеп тыуған мәсьәләләр, пенсия күләменең бик аҙ булыуы, торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә хаҡтарҙың арта барыуы, медицина хеҙмәтләндереүенең һәм дарыуҙар менән тәьминәттең тейешле кимәлдә булмауы кеше хоҡуҡтары буйынса вәкәләтлек органдарына хаттар яҙырға мәжбүр итә. Ә шулай ҙа уларҙың торлаҡҡа хоҡуҡтарын ғәмәлгә ашырыуҙа килеп тыуған кәртәләр - иң "ауыртҡан" мәсьәләләрҙең береһе инде ул. Республикала, үкенескә күрә, торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға иҫәптә торған граждандар һанының да, сират көтөү ваҡытының да кәмеүгә табан барыуы һиҙелмәй әле... Күп фатирлы йорттар төҙөлөшөндә ҡатнашыусы өлөшсөләр хоҡуҡтарын яҡлау мәсьәләһе беҙҙә генә түгел, Рәсәй Федерацияһының башҡа субьекттарында ла бик киҫкен тороуын, шул сәбәпле өлөшсөләрҙең митингыларға сығыуын, башҡа төр акцияларға мәжбүр булыуҙарын да йыш ҡына ишетеп-күреп торабыҙ. Шул уҡ ваҡытта әйтеп китеү кәрәк: Башҡортостанда торлаҡ төҙөлөшөндә ҡатнашыусы өлөшсөләр хоҡуҡтарын яҡлау мәсьәләһе республика етәкселеге контроленә алынған. Шунының һөҙөмтәһе булараҡ, былтыр мендән ашыу кеше ҡулына фатир асҡыстары алыу бәхетенә өлгәште. Шул уҡ ваҡытта проблема артабан хәл итеүҙе көтә.

Был мәсьәләләрҙән тыш, беҙгә хөкөм ителгәндәрҙең хоҡуҡтарын һаҡлауҙы күҙәтеү эше менән дә шөғөлләнергә, төрлө тормош хәлдәре арҡаһында йортһоҙ тороп ҡалған берәҙәктәр мәсьәләләрен хәл итеүҙә лә ҡатнашырға тура килә. Әйтеп китеүемсә, эшһеҙлек, эш хаҡына бәйле мөрәжәғәттәр менән бер рәттән, хеҙмәт бәхәстәрен үҙ эсенә алған осраҡтар ҙа бик күп. Граждандарҙың дәүләт власы һәм урындағы үҙидара органдарына мөрәжәғәт итеүҙә Конституция хоҡуҡтарының боҙолоуына ҡарата ла ризаһыҙлыҡтары күп: теге йәки был мәсьәләләр буйынса етәкселәрҙең граждандарҙы ҡабул итеүҙән баш тартыуы, ғариза һәм яҙма мөрәжәғәттәрҙең законда билдәләнгән ваҡыт эсендә ҡаралмауы, рәсми яуаптың булмауы йәки мөрәжәғәттәргә формаль мөнәсәбәт кеүек мәсьәләләр беҙҙе борсоуға һала. Икенсе яҡтан, ғариза-мөрәжәғәттәрҙең күбәйеүе властың халыҡҡа асыҡ булыуы, уға йөҙ тота башлауы, ә граждандарҙың иһә үҙ конституцион хоҡуҡтарын яҡлауҙа арта барған хоҡуҡи хәбәрҙарлығы хаҡында ла һөйләй түгелме?


**(Дауамы 2-се биттә).**


### ЗЫЯЛЫЛАР - "КИСКЕ ӨФӨ" ТУРАҺЫНДА



# ГӘЗИТ УҠЫЙ ИКӘН...

## тимәк, ул кеше һау-сәләмәт

**Мәскәүҙән әсәйемә хәл белешеп, йыш шылтыратам. "Әсәй, хәлдәрең нисек?" тип һораһам, йыш ҡына уның:"Бына, балам, һин яҙҙырған "Киске Өфө"нө уҡып ултырам әле", - тигән яуабын ишетеп, ҡыуанып китәм.**



Бындай яуап минең өсөн күпте аңлата. Берҙән, әгәр кеше гәзит уҡый икән, тимәк, ул сәләмәт, теремек, донъяға, тормошобоҙҙа булып ятҡан мәсьәләләргә битараф түгел. Икенсенән, гәзит уҡыу йәшәйешебеҙгә позитив мөнәсәбәт, сәләмәт ҡыҙыҡһыныусанлыҡ тыуҙыра. Ундай кешеләр, билдәле, һәр саҡ әүҙем, йәштәрсә сәм менән йәшәй. Юғиһә, "тыумаҫ элек" күңелдәре ҡартайғандар ҙа күп бит арабыҙҙа. Ундайҙарҙың йортон почтальондар урап үтә, сөнки бында гәзит уҡымайҙар. Ана шундай битарафтар булмаһын, тип, мин йыл һайын һайлаусыларым йәшәгән Әбйәлил, Баймаҡ, Бөрйән, Ейәнсура, Йылайыр, Күгәрсен, Хәйбулла районларының һаулыҡ һаҡлау һәм халыҡты социаль яҡлау буйынса стационар учреждениеларға, ветерандарға, әсәйемә, инәйемә, башҡа яҡындарыма үҙ иҫәбемә "Киске Өфө", "Башҡортостан" гәзиттәрен, "Башҡортостан ҡыҙы" журналын яҙҙырам.

"Киске Өфө"- үҙемдең дә яратып уҡыған гәзитем, сөнки ул рухи донъябыҙҙы байытыуға, туған телебеҙҙе, еребеҙҙе, сал тарихыбыҙҙы һаҡлауға, арҙаҡлы шәхестәребеҙҙе күтәрмәләүгә, бөгөнгө йәш быуынды улар өлгөһөндә тәрбиәләүгә бик ҙур өлөш индерә. "Тарихнамә", "Фекер төйөнө", "Диалог" һәм "Монолог" материалдарын ҡыҙыҡһынып уҡыйым. Ғөмүмән, ҡайһы ғына мәҡәләне алма, унда ниндәйҙер фекер яңылығы, фәһем бар уҡыусы өсөн. Төрлө сәбәптәр менән был гәзиткә яҙылмаған, уны уҡымаған кешеләр миңә бик йәл булып китә. Ғәжәйеп бер бай, юғары рухи мөхит менән аралашыуҙан мәхрүм бит улар! Шуға күрә лә матди мөмкинлеге булған уҡыусылар "Киске Өфө"нө туғандарына, дуҫтарына, тыуған ауылындағы мәктәпкә, китапхана һәм клубтарға, ветерандарға яҙҙырһа, уларға бына тигән Яңы йыл бүләге буласаҡ был!

**Сәлиә МЫРҘАБАЕВА,**
**РФ Дәүләт Думаһы депутаты, медицина фәндәре докторы.**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ИШ ЯНЫНА ҠУШ ИТЕП...

## борсаҡ һатам



**Ауыл ерендә йәшәүселәр өсөн йәй айҙары рәхәтләнеп ял итеү түгел, ә иң һыҙғанып эшләү миҙгеле. Ҡарлы-буранлы ҡышты бер михнәтһеҙ үткәрергә теләгәндәр йәйҙең бер көнөн дә бушҡа сарыф итмәй: бесәнен әҙерләй, утынын хәстәрләй, баҙына йәшелсә-емеш тултыра, ҡаҙ-өйрәген үҫтерә. Шул уҡ ваҡытта ауыл уңғандары тәбиғәт байлығын файҙаланып, баҡсаһында уңыш үҫтереп, бер аҙ аҡса туплап ҡалыу әмәлен дә эҙләй. Билдәле булыуынса, кем эҙләй - шул таба. Мин дә шулар иҫәбендә.**

Минең аҡса эшләү әмәлем, тәүге ҡарашҡа, әллә ни ҙур килем килтермәй кеүек. Ләкин өйҙә ултырһаң, был "әҙмекүпмене" лә күреп булмай. Еләк, бешмәк, төрлө үлән һатыусылар һәр өй һайын бар, шуға күрә был хаҡта тәфсирләп яҙып тормайым. Мин иһә еләк-емешкә ҡуш итеп, йыл да август айында борсаҡ һатам. Был талымһыҙ үҫемлек баҡсала күп урын да алмай, ә уңышы мул була. Яңы ғына өлгөргән борсаҡты ҡала халҡы яратып һатып ала.

Әйтергә кәрәк, был шөғөл менән булыу өсөн яҡын-тирәлә ҡала булыуы шарт, сөнки ауылдаштарыбыҙ борсаҡ менән аптыратып булмай. Ә ҡаланыҡыларҙың иһә был йәшел үҫемлекте күрһә, күҙҙәре янып китә. Ҡайһы берәүҙәр уны күпләп һатып алып китә. Барған һайын 1,5-2 мендән дә кәм аҡса эшләмәйем. Һата-һата оҫтарып та бөтөлдө, сослоҡ та артты. Тәүҙәрәк арзанға ғына һата инем, хәҙер яныма килеүсенең өҫ-башына ҡарап ҡуям хаҡты. Кемгә бер сеүәтәһен 30 һумға, кемгә 50 һумға тотторол ебәрәм. Баҙар ҡанундары ҡаты, йә отаһың, йә отолаһың, йә аҡса эшләйһең, йә юҡ. Ә алыҫ араны яҡын итеп барыуын барғас, буш кеҫә менән ҡайтҡы килмәй һәм бар оҫталыҡты, таһыллыҡты һалып тырышаһың.

Аҡса эшләүҙең бына ошондай юлы ла бар, хөрмәтле гәзит уҡыусылар. Әгәр ҙә кемгәләр минең тәжрибәм ярҙам итһә, шат булырмын.

**Зөһрә ВӘЛИЕВА.**
**Әбйәлил районы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Беҙҙә бөгөн граждандар РФ һәм БР Конституциялары тарафынан гарантияланған хоҡуҡтары менән тулыһынса файҙалана аламы? Кеше хоҡуҡтарын һанламау йәки боҙоуҙың ниндәй осраҡтары йыш ҡабатлана?

**(Башы 1-се биттә).**

***Гүзәл ХАРРАСОВА, БР Адвокаттар коллегияһы адвокаты:*** Үкенескә күрә, мин, беҙҙең граждандар үҙҙәренең конституцион хоҡуҡтарын тулыһынса гәмәлгә ашыра ала, тип әйтә алмайым. Уның сәбәптәре лә бар, әлбиттә. Беренсенән, был граждандарҙың хоҡуҡи мәғлүмәткә эйә булмауы, ошо өлкәлә мәғлүмәтһеҙлеге. Киләһе сәбәптәрҙең береһе - ул закондарҙың, йәғни граждандарҙың үҙ конституцион хоҡуҡтарын гәмәлгә ашырыу механизмын көйләүсе закондар һәм закон акттарының камил булмауы. Йыш ҡына закондарҙың шундай кәмселектәре килеп осрай, шунлыҡтан, хоҡуҡ ҡулланыусылар нигеҙләмә өсөн башҡа берәй закон нормаһына йә булмаһа дөйөм хоҡуҡ нигеҙҙәренә таянырға мәжбүр була, ә был үҙ сиратында закондың теге йәки был нормаһын һәр береһе үҙ белдеге менән ирекле рәүештә анлатма биреүгә сәбәпсе була. Һөҙөмтәлә ниндәйҙер бер мәсьәләне хәл итеүҙә һәр төбәктең бер-береһенән байтаҡҡа айырмалары булған үҙ хоҡуҡи гәмәлдәре барлыҡҡа килә. Шул арҡала Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы тарафынан бөтә граждандар өсөн дә бер тигеҙ хоҡуҡтар ҡаралыуға ҡарамаҫтан, уларҙы хәл итеү, бойомға ашырыу юлдары һәм ысулдары төрлө төбәктәрҙә төрлөсә килеп сыға.

Бюрократизм тарафынан яһалма булдырылған һәр төрлө ҡаршылыҡтар, дәүләт органдарындағы, асылда, бер-береһенең эшен ҡабатлап ултырыусы структура һәм бүлексәләр ҙә граждандарға үҙ конституцион хоҡуҡтарын гәмәлгә ашырыу юлында кәртә булып тора, тип әйтер инем.

Байтаҡ эш тәжрибәһе туплаған юрист булараҡ, минә хеҙмәт, торлаҡ, шәхси милекселек хоҡуҡтарының, шулай уҡ еңәйәт эштәрен алып барыуҙа РФ Конституцияһының 49, 50-се статьялары тарафынан ҡаралған конституцион һәм процессуаль хоҡуҡтарының боҙолоу факттары менән дә йыш осрашырға тура килә. Мәҫәлән, ошо нормаларға ярашлы, гәйепләнеүсе үҙенең гәйепһеҙ булыуын иҫбатларға бурыслы түгел. Кешенең гәйепләнеүенә шик белдереү асылда уны гәйепләүгә әйләнә. Суд эштәрен алып барғанда федераль законды боҙоу юлы менән табылған иҫбатлауҙарҙы файҙаланыу тыйыла. Үкенескә күрә, гәмәлдә Конституцияның был положениелары йыш боҙола. Аҡлау хөкөмдәренең ни бары 0,2 процент тәшкил итеүе лә был хаҡта бик асыҡ һөйләп тора. Әйткәндәй, Конституцияның дәүләт властары органдары йәки вазифалы кешеләрҙең законһыҙ гәмәлдәре (йәки эш итмәүе) арҡаһында килтерелгән зыянды ҡаплауға һәр кемдең хоҡуғын тәьмин итергә тейешле статьяһы ла эшләмәй. Билдәләп киткәнемсә, әгәр ҙә граждандар ошо өлкәлә үҙ хоҡуҡтарын белһә һәм уны гәмәлдә әүҙемерәк файҙаланһа, бюрократ чиновниктар ҙа аҙыраҡ булыр һәм улар ватандаштары хәстәрлектәрен йөрәктәренә яҡыныраҡ алыр ине, тигән уйҙамын.

***Фәтих ҠОТЛОБАЕВ, хаҡлы ялдағы уҡытыусы, хеҙмәт ветераны:*** Илебеҙҙең төп законы булып торған Конституциябыҙ, күрәһең, камил һәм тулы гармониялы йәмғиәтте күҙҙә тотоп яҙылған. Ләкин һәр кем белә: әгәр бөтәһе лә ҡағыҙҙа яҙылғанса булһа, бөгөн бындай хәлгә төшмәгән дә булыр инек. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: кеше үҙенең йәшәйешен тәьмин итеүсе элементар хоҡуғынан - хеҙмәткә хоҡуҡтан мәхрүм ителгән заманда йәшәйбеҙ. Йәмғиәтебеҙ ниндәй генә замандар кисермәне үҙ башынан, ләкин иң ауыр тигән осорҙарҙа ла һәр кемдең ике ҡулына эше булды, эшһеҙлек тигән нәмәнең ни икәнен дә белмәнек. Эш урындары булып та эшләмәй ятҡандар берәү-икәү генә ине, уларҙы ла әрәмтамаҡ, тунеядец тип көн күрһәтмәй, барыбер эшкә ҡушалар ине. Торлаҡҡа хоҡуҡ та бермә-бер ауырлашты бөгөн.

Йәнде әрнеткән тағы бер мәсьәлә бар. Республикабыҙҙа хәҙер Европа кимәлендә хеҙмәтләндереүсе бына тигән шифаханаларыбыҙ бар, ләкин уның ишектәре миллионерҙар өсөн генә асыҡ. Йылдар буйы иленә намыҫлы хеҙмәт көсөн түккән ветерандар хәйерсе пенсияларына унда ғүмер эсендә бер тапҡыр барып та ял итә алмай. Үҙ еребеҙҙәге шифаханаларҙың сихәтенә ситтән килеүселәр кинәнә. Әйткәндәй, ошо күренешкә бәйле фекер ебен тағата башлаһаң, урындағы төп халыҡ хоҡуҡтарының бер нигә лә һанланмауын күреп, йәнә бер әрнейһең. Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы Ассамблеяһы тарафынан ҡабул ителгән Төп халыҡтар хоҡуҡтары тураһындағы Декларацияла әйтелеүенсә, төп халыҡтар үҙ хоҡуҡтарын гәмәлгә ашырыуҙа һис бер ниндәй дискриминацияға дусар ителергә тейеш түгел, ә беҙҙә йыш ҡына төп халыҡ вәкилдәрен төрлө кимәлдәге власть органдарына етәкселек итеүҙән ситләштереү, эҙәрлекләү, эштән бушатыу кеүек хоҡуҡ боҙоуҙар күп осрап тора. Төп халыҡ вәкилдәре күрәләтә республикабыҙҙың сәйәси, иҡтисади, социаль тормошонда башҡа халыҡтар менән бер тиң ҡатнашыу хоҡуғынан мәхрүм ителә. Төп халыҡтың быуаттар буйы ата-бабалары йәшәп килгән тыуған еренә, үҙ биләмәләренә һәм ундағы ресурстарға хоҡуҡтары ла ҡыҫылғандан-ҡыҫыла бара. Кеше хоҡуҡтары тейелгеһеҙ, улар тейешле закон нигеҙҙәрендә яҡлана һәм һаҡлана. Әгәр ул урындағы власть органдары тарафынан яҡлау тапмаһа, тупаҫ рәүештә боҙолһа, юғарыраҡ инстанцияларҙан барлығын да онотмаҫҡа кәрәк, тип иҫтәренә төшөргөм килә гәзит уҡыусыларҙы. Хоҡуҡтарығыҙҙы яҡшыраҡ белегеҙ, закондарҙы өйрәнегеҙ, бөгөн шунһыҙ көн күреүе ғәләмәт ауыр.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле тамамлана.**

● Шулай итеп, 2014 йылдың беренсе яртыһына 50665 индексы **"Киске Өфө"** гәзитенә **384 һум 36 тингә**, 50673 индексына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 414 һум 36 тингә яҙылырға була.

Декабрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе иң тәүге 2 уҡыусыбыҙ - **башҡортса Ҡөрьән Кәрим**, 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Гөлфиә Янбаеваның "Елле фекерҙәр елгә осмаһын"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Күгәрсен районында эш сәфәре менән булғанда Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ҡиммәтле тиреле йәнлектәр үрсетеүгә махсуслашҡан фермала булды. Мәҡсәт ауылы эргәһендә урынлашҡан хужалыҡта 17 мең баштан ашыу ҡиммәтле тиреле йәнлек аҫрайҙар. Предприятиеның перспективалары ҙур, тип һөйләнеләр Президентҡа уның етәкселәре. Бер нисә йылдан уларҙың йәнлек фермаһы илдә иң эреләрҙең береһенә әйләнәсәк, тип ышана улар. Тиҙҙән "Октябрь" яуаплығы сикләнгән йәмғиәтенә Финляндиянан аҡ төлкө тиреләрен эшкәртеү өсөн ҡорамалдар килтереләсәк.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Ейәнсура районының "Карабирҙе" крәҫтиән (фермер) хужалығы миҫалында агротуризм үҫеше менән танышты. Хужалыҡ 2009 йылда асыла, үҫемлексelek һәм малсылыҡ кеүек традицион йүнәлештәрҙән тыш, бында ауыл туризмын үҫтереү буйынса планлы һәм системалы эш алып барыла. Предприятие 206 гектар һөрөнтө ерҙе ҡуртымға алған. Хужалыҡтың заманса ауыл хужалығы техника парҡы бар. Агротуризмды үҫтереүгә ярашлы, бөтә унайлыҡтары булған ике коттедж төҙөлгән, эргәлә быуа эшләнгән, унда карп, толстолобик һәм аҡ амур үрсетәләр.

✓Төркиә инвесторҙары Өфөлә 23 километр оҙонлоғонда метробус маршруты һалырға планлаштыра, ул аэропорттан башланып, Сельская Богородская урамына тиклем һуҙылырға тейеш. Метробус проекты мэрияла төрөк компаниялары вәкилдәре менән ентекле тикшерелде. Улар шулай уҡ Ҡулса урамындағы 131-се йортта урынлашҡан бала табыу йортон кинәйтеү, реконструкциялау һәм яңыртыу, Өфөлә бер балалар клиникаһы һәм биш яңы дөйөм клиника төҙөү кеүек проекттарҙа ҡатнашырға теләүен белдерҙе.

✓Өфө амфитеатрын - Конгресс-холл артындағы ландшафтлы майҙансыҡты экстремаль спорт төрҙәре паркын төҙөү өсөн алмаясаҡтар икәнен белдерҙе Башҡортостан Президенты. Уның билдәләүенсә, Конгресс-холл артындағы майҙансыҡ - төрлө концерттар, кино күрһәтеү һәм фестивалдәр үткәреү өсөн бик унайлы урын. Шул уҡ ваҡытта ҙур төҙәлешкә әлегә аҡса юҡ, тип билдәләне республика башлығы.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# БӨГӨНГӨГӘ - БИТАРАФ...

## киләсәккә вайымһыҙ халыҡ булмайыҡ!

**Халыҡты бер вәкиленең йөҙөнә ҡарап танып, холоҡ-ҡылыҡтарын күреп тә баһалап була, тигән фараз бар. Тормошта, ысынлап та, күп ваҡыт шул күҙлектән сығып һығымта яһайҙар.**

Беҙ, башҡорттар, бөгөн боронғо ишан, хәҙрәт, шәйехтәребеҙҙең исемдәрен тергеҙеп, 250-300 элек йәшәгән Юлай Аҙналин, Кинйә Арыҫланов, Салауат Юлаев, Алдар, Сураған батырҙар, 100 йылдан ашыу элек тыуған Муса Мортазин, Шәһит Хоҙайбирҙин, 60-70 йылдар элек илдә дан яулаған Муса Гәрәев, Миңлегәле Шайморатов, Таһир Кусимов кеүек арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең данлы исемдәренә һыйынып, йөҙөбөҙҙә һаҡларға, милләтебеҙҙе яҡларға тырышабыҙ. Улар барыһы ла үҙ замандарының арҙаҡлы улдары һәм шәхестәре. Беҙ ҙә һәйкәлдәр ҡуйып, исемдәрен мәңгеләштереп, атаҡлы шәхестәребеҙ менән хаҡлы ғорурланабыҙ. Әлбиттә, уларға йыш һылтаныуҙан исемдәренең даны уналмаҫ, ләкин һәр быуындың үҙ шәхестәрен үҫтереп ғорурланыуы тағы ла яҡшыраҡтыр, тип уйлайым һәм фәҡәт шулай булырға тейешлегенә инанам, сөнки боронғо шәхестәренә, данлы эштәренә генә һөйәнеп, һылтанып ултырған халыҡ заман үҫешенән артта ҡалыуы ихтимал.

Ләкин ҡайҙа һуң бөгөнгө заман геройҙарыбыҙ? Йәмғиәтебеҙ өлгө булырҙай шәхестәргә ҡытлыҡ кисерә. Шуға ла беҙ йыш ҡына йөҙөбөҙҙә һаҡлар өсөн хатта сит ерҙәрҙә тыуып, сит мөхиттә тәрбиәләнеп үҫкәндәргә һыйынырға мәжбүрбеҙ. Мәҫәлән, бер генә башҡорт уйынсыһы ла булмаған "Салауат Юлаев" хоккей командаһы өсөн флагтар күтәреп йөрөйбөҙ. Милләтебеҙҙең батыры исемен әллә ҡайһы сит тарафтарҙан бер-ике килмешәк килеп күтәреп китә лә - вәссәләм. Ундай "уныш", үҙең үстермәгән емеш кеүек, тәме лә ят, таты ла танһыҡка ғына...

Ә йәштәребеҙ үҙҙәренә кумир, герой эҙләй. Өлгө булырҙай шәхестәр юҡлыҡтан, уларҙың кумирҙары Гарри Поттер, Шрек, "Кеше-үрмәксе" йәиһә шулар кеүек тыуға яҙмаған бер убыр. Ышанмаһағыҙ, 5-10 йәшлек баланан һорағыҙ. Ә өлкәнерәктәренең кумирҙары йә бандит, йә аҙғын олигарх. Ярай әле, уларҙың араһында, исмаһам, бер-ике урыҫ фамилияһы осрай.



Ә ниңә бөгөн өлгө булырҙай шәхестәр юҡ һуң? Юҡ, сөнки үҫтермәйбеҙ. Шәхес үҫтереү бик мәшәҡәтле һәм аҡсаһыҙ эш. Ул эш менән булышырға теләүселәр бөгөн юҡтыр ҙа. Бер-ике кеше уңыштарға өлгәшһә, күтәреп алабыҙ ҙа, кәрәге бөтһә, ташлайбыҙ. Тимәк, күтәрелеп сыҡҡанды үҫтерә белмәйбеҙ йә теләмәйбеҙ. Күтәрергә, үҫтерергә тейешле вазифа биләүселәр ҙә үҙ эштәренә илке-һалҡы ҡарай. Был хәл йәмғиәтебеҙҙең лидер тәрбиәләүгә һәләтһеҙлегенәнме, әллә көсһөҙлөгөнәнме? Нисек кенә булһа ла, үҙебеҙгә талапсанлыҡ етешмәй, яттарҙың ихтирам итеүен талап итер ҙә ихтыяр юҡ.

Әйтелгәндәр буш ерҙә тыуған фантазия түгел. Кемдәргәләр яла яғыу ҙа түгел. Әҙ генә йәмғиәт тормошо, сәйәсәт менән ҡыҙыҡһынған кешегә мәғлүм: беҙгә тирә-яҡтан данлы милләттәштәребеҙҙе кәмһетеп, билдәле шәхестәребеҙҙең исемдәрен бысратып йә яла яғып, тарих биттәренән юйып маташыусыларҙың һөжүме көсәйҙе. Уларҙың маҡсаты - башҡортто данлы эштәре, арҙаҡлы шәхестәренән яҙҙырып, йөҙһөҙ, телһеҙ, рухһыҙ, булдыҡһыҙ халыҡ итеп күрһәтеү. Әйтергә кәрәк, был эштәр урыны менән (бигерәк тә халҡынан, иленән көсләп айырылған милләттәштәр араһында) бик әүҙем һәм уңышлы алып барыла. Шулай булмаһа, Салауат батырыбыҙҙың һынын ҡороған ағаста күрһәтергә теләмәҫ, Ағиҙелде - Белая, Шүлгәнде - Каповая, Яҡтыгүлде - Банное, Балаҡатайҙы Белокатай тип атамаҫ, аҫаба ерендә йәшәгән башҡортто татар тимәҫтәр ине. Иртәгә берәү Өфөнө икенсе төрлө атарға тәҡдим индерһә, барыбер өндәшмәҫбеҙ, сөнки, исмаһам, бер вазифалы әһел Башҡортостан юлдаш телеканалында эшләүселәргә Рәсәйҙә "Башкирия" исемле республика юҡ икәнен аңғартыр ине. Моғайын, шуны ла аңламаҫлыҡ наҙандар эшләмәйҙер республиканың төп каналында. Үҙебеҙҙә талап итергә, үҙебеҙҙекеләрҙе төҙәтергә, өйрәтергә ихтыяр булмағас, мәскәүҙәргә нимә тип әйтәһең? Күрше Татарстанды хәҙер бер кем дә "Татария" тип һөйләмәй!

Арҙаҡлы шәхестәр милләттең йөҙөн билдәләүҙә мөһим роль уйнай, ләкин халыҡтың йөҙөн, йәшәйешен пропагандалауҙа башҡа шарттар ҙа бар: милли кейемдәр, милли аштар, милли уйын ҡоралдары, милли сәхнә әҫәрҙәре. Милли республикабыҙҙа милли һыҙаттарҙы сағылдырған заманса кейемдәр һатыламы? Юҡ. Милли аштар тәҡдим иткән ашханалар селтәре бармы? Юҡҡа тиң. Милли уйын ҡоралдары, милли сәхнә әҫәрҙәре киң пропагандаланамы? Юҡ. Башҡортостанда башҡорттоҡонан, башҡортлоҡтан башҡа бөтәһе лә бар...

Йөҙҙө юғалтыу тәү ҡарашҡа ябай ғына күренештәрҙән, мөһим булмаған кеүек килешеүҙәрҙән, бәләкәй генә сигенеүҙәрҙән башлана. Балаларға ят исемдәр ҡушыуға, ауылдар, ер-һыу атамаларын боҙоп тәржемә итеүгә ризалашыу, урамдарҙы илебеҙ, халҡыбыҙ тарихына, тормошона бер ҡыҫылышы булмаған исемдәр менән атау, әсә телен ят һүҙҙәр менән бысратыуға түҙеп ҡарауҙар ваҡыт уҙыу, быуындар алмашыныу менән үҙ эшен эшләй. Халыҡтың йөҙө төҫһөҙләнә барыуы менән уның тарихи ҡомартҡыларына, мәҙәни ҡаҙаныштарына, милли үҙенсәлектәренә дөгөүселәр күбәйә. Был аянысллы хәл халыҡты данлы үткәндәренән, арҙаҡлы шәхестәренән, яулаған уңыштарынан биҙҙереп, киләсәгенән төңөлдөрөп, асылынан да яҙҙырыуы ихтимал...

Данлы эштәре, һоҡланғыс шәхестәре булған милләтте танырҙар, ихтирам итәләр, тиң итәләр. Бөгөн кәмселектәр менән килешеп, кәмһетеүҙәргә түҙеп, өлгәшелгәндәрҙән төңөлөп, сәбәпһеҙ ҙә сигенеп, йәшәү көсөн үткәндәрҙән генә эҙләү менән артыҡ ныҡ мауығып киттек. "Үткәндәренә мөкиббән, бөгөнгөһөнә битараф, киләсәгенә вайымһыҙ халыҡ алға бара алмай", тип тә әйткән бит бер аҡыллы баш. Шул үкенесле хәлгә юлыҡмаһаҡ ярар ине...

Әлбиттә, бөтә яҡтан ҡамалып, ҡыҫылып йәшәгән халыҡтың ҡапыл ғына зур уңыштарға өлгәшеүе икеле. Ҡырымһа ҡырҡ күҙәтеүсе, әҙәрлекләүсе органдар булыуға ҡарамаҫтан, ҡоторғандар ҡотора, баҫылғандар баҫыла, уңайлы ултырғандар, "үҙгәртеп ҡороуҙар" һылтауы менән, халыҡ милкен талай бирә. Аҡсаға һатылғандар илебеҙҙе ҡыйратыу, йәмғиәтебеҙҙе тарҡатыу, йәштәрҙе аҙҙырыу эштәрен уңышлы алып бара. Әгәр ары ла вайымһыҙ ғына күҙәтеп ятһаҡ, һис шикһеҙ, улар маҡсатына ирешәсәк.

Һәр яңы быуын, моғайын, алға барам, яҡшыраҡ йәшәү шарттары булдырып, гүзәл, тигеҙ тормош ҡороу юлын һайлайым, тип уйлайҙыр бит. Тимәк, әгәр элегерәк бөгөнгөнән насарыраҡ шарттарҙа йәшәгән быуындар үҙ шәхестәрен тыуҙырып, үҫтереп, тәрбиәләргә һәләтле булғандар икән, бөгөнгө ул замандар менән "сағыштырғыһыҙ алға киткән" тормошта ниңә шәхестәргә ҡытлыҡ кисерәбеҙ? Әллә алға бармайбыҙмы? Шулай икән, ниңә ошондай йәшәү рәүешен һайлайбыҙ? Әллә кешелек үҙенә үҙе насарлыҡ теләйме?

Үрҙә әйтелгән буталсығыраҡ фекерҙәремдең төйөнө итеп, шуны әйтке килә: әҙәбиәт - һүҙһеҙ, мәғрифәт - телһеҙ, сәнғәт - йөҙһөҙ, йәмғиәт өнһөҙ булған һәйин, рухиәт төҫһөҙләнә, тормош битһеҙләнә, холоҡ-ҡылыҡтар көндән-көн йәмһеҙләнә барыуы һәр намыҫлы башҡортто уйландырырға тейештер ул... Уйланайыҡ, йәмәғәт!

**Урал МОСТАФИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостан Президенты "Өфө" журналында баҫылған интервьюла "Кроношпан ғауғаһына" баһа бирҙе. Уның билдәләүенсә, хәҙер инвесторҙар документтарҙы тәртипкә килтерә, бөтә һығымталарҙы ала, шул иҫәптән экологик та, шул саҡта конфликт бөтөргә тейеш. "Өфө эргәһендә һәм республикала кеше өсөн зыянлы һәм хәүефле бер ниндәй ҙә производство төҙөлмәйәсәк. Бөтә ҡарарҙар етди тикшереүҙәр үткәреп һәм йәмәғәтселек фекерен иҫәпкә алып ҡына ҡабул ителәсәк", тип белдерҙе Рөстәм Хәмитов.

✔Башҡорт дәүләт аграр университетында ректор һайланылар. Ректор вазифаһына башта өс кандидат дәғүә итте - БДАУ ректоры, техник фәндәр докторы, профессор Илдар Ғәбитов; БДАУ-ҙың беренсе проректоры, техник фәндәр докторы, профессор Марс Фархшатов һәм агротехнологиялар һәм агробизнес факультеты деканы, ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор Мөхәмәт Хәйбуллин. Аграр вуз ректорын һайлау буйынса конференцияла 219 делегат ҡатнашты. Уларҙың 205-е, йәғни 93,6 проценты Илдар Ғәбитов өсөн тауыш бирҙе.

✔Эҙәрмәндәр Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған Башҡортостан яугирының "Батырлыҡ өсөн" миҙалын тапты. Архивта эҙләнеү барышында һалдаттың туғандарын асыҡлай алдылар. Улар араһында Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова ла бар, ул яугирҙың ейәнсәре булып сыҡты. Уның олатаһы Вәхит Шафиҡовтың миҙалы Псков өлкәһенең Пушкиногорск районы Каменка ауылы эргәһендә табыла. Документ номеры буйынса артиллеристың награданы 1943 йылдың йәйендәге һуғыштар өсөн алыуы асыҡлана. Ул 40 гитлерсыны, миномет батареяһын һәм пулемет ояһын тар-мар иткән өсөн ошо наградаға лайыҡ булған.

✔"Йылдың иң яҡшы табибы" республика конкурсы йомғаҡтары буйынса республикала иң яҡшы һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәре билдәләнде. Ярышта еңеүгә дәғүә итеүсе 94 табип ҡатнашты, ә еңеүселәр 31 номинация буйынса билдәләнде. Еңеүселәр премия менән бүләкләнәсәк, шулай уҡ бөтә Рәсәй конкурсында республика намыҫын яҡлаясаҡ.

**"Башинформ"дан.**

БАШ ЙОРТТА



# УЙЛАНЫУҘАРЫМ...

## Өфөм тураһында

**Өфөгә тәүләп аяҡ баҫыуым 1984 йылда, Баймаҡ районындағы тыуған ауылым Темәс урта мәктәбенең етенсе синыфын тамамлағас, Өфөләге 1-се республика башҡорт интернат-мәктәбенә уҡырға ингәс булды. Тәүге мәлдәрҙә ҡала урамына сығам да, ҡаршыға осраған һәр оло кеше менән һаулыҡ һорашам, бейек-бейек йорттар эргәһендә туҡтап, аптырап ҡарап торам...**

Ҙур ҡаланы ниндәйҙер бер көс итеп күҙ алдына килтерәләр. Ысынлап та, ҡала тигән нәмәнең, дөрөҫөрәге, ундағы төрлө мөнәсәбәттәрҙең, процестарҙың йәш кешегә ни тиклем көслө тәьсир итеүен хәҙер инде үҙем дә яҡшы беләм. Сөнки мин Өфөлә инде утыҙ йылға яҡын йәшәйем.

Мин уҡырға килгән йылдарҙа ҡала урамдары буйлап йөрөгән троллейбустарҙа, трамвайҙарҙа билет һатыусы кондукторҙар ролен махсус касса аппараттары үтәй ине әле. Күптәр хәтерләйҙер. Ҡыҙыҡ, беҙ үҙебеҙ белмәйәк тә, коммунизмда йәшәгәнбеҙ икән, тип уйлап ҡуям шул саҡты.

Транспортҡа инәһең дә, быяла һауытҡа тәңкәнде төшөрөп, борғосто бороп, билет йыртып алаһың. Ҡайһы бер шуғыраҡ малайҙар шул касса янына баҫып, пассажирҙарҙың аҡсаһын кассаға һалып, билет биреүсе ролен үтәй торғайны. Ара-тирә ул аҡса теге малайҙарҙың кеҫәһенә лә "тама".

Ял көндәрен түҙемһеҙлек менән көтөп алып, тәрбиәселәрҙән ҡала ҡыҙырырға рөхсәт алып, синыфташ малайҙар менән "Искра" кинотеатрына, В.И. Ленин исемендәге майҙанға бара торғайныҡ. Бер һинд киноһын ҡарағаным әле лә иҫтә. "Танцор диско" ине исеме. Кинонан һуң кинотеатр алдындағы майҙанда йөрөйбеҙ. Бөгөнгө урамдар менән сағыштырғанда, таҙалыҡ яғынан ул саҡтағы Өфө урамдары барыбер бер аҙ таҙараҡ, бөхтәрәк һымаҡ ине. Кешеләрҙең күңел таҙалығына килгәндә лә, улар бер-береһенә ҡарата ягымлыраҡ, итәғәтлерәк ине. Хәҙер ҡалабыҙ үҫә, автомобилдәр һаны ла йылдан-йыл арта бара. Тормош яҡшыра барған кеүек, ә урамда кешеләрҙең йөҙҙәрендәге йылмайыу яйлап һүнә. Эш көнө тамамланып, йәмәғәт транспорты тулҡалышына килһәң, был хәл айырым-асыҡ күренә. Бөгөнгө ҡала кешеһе образын һүрәтлә әле, тиһәләр, һөмһөрө ҡойолған, уйсан кеше күҙ алдына килер ине. Бөгөнгө ҡала кешеһе шул тиклем үҙ-үҙенә бикләнгән - ҡолағына тығылған наушниктарҙан ағылған көй ҙә күңелен күтәрә алмай хатта.

Ҡала тормошона килгәндә, бөгөн ҡалала тормош юғары тиҙлектәрҙә елә: шау-шыу, ығы-зығы араһында йөрөп, ваҡыттың нисек үткәне лә һиҙелмәй ҡала. Бөгөн шау-шыу көслө, уның ҡарауы, яңы биналар, яңы микрорайондар төҙелә. Бары шуны телге килә: яңы идеяларҙы тормошҡа ашырған саҡта Өфөнөң үҙ йөҙөн һаҡларға тырышһын ине архитекторҙар, ҡала менеджерҙары. Санкт-Петербургты ана нисек һаҡлайҙар. Тағы, яңы төҙөлгән ҡунаҡханаларға үҙебеҙсә яңғырашлы матур исемдәр ҡушайыҡ!

**Илдар УРМАНТАЕВ,**
**Өфөләге 123-сө лицейҙың башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЭКОНОМ-КЛАСС ТОРЛАҒЫ...

## ошо тәртиптә бирелә



**Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Федераль торлаҡ төҙөлөшөн үҫтереүгә булышлыҡ итеү фондының эконом-класс торлағы төҙөү өсөн, шул иҫәптән бындай торлаҡ төҙөү маҡсатында комплекслы үҙләштереү өсөн бушлай файҙаланыуға йәки ҡуртымға тапшырылған ер участкаларында төҙөлгән йәки төҙөлөп ятҡан эконом-класс торлағы һатып алыуға хоҡуғы булған граждандар исемлеген төҙөү ҡағыҙҙәре һәм күрһәтелгән граждандарҙы был исемлеккә индереү тәртибе тураһында" БР законына ҡул ҡуйҙы. Документ баҫылып сыҡты һәм ун көндән, йәғни 13 декабрҙә, көсөнә инәсәк.**

Был закон проекты беренсе уҡыуҙа республика БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары тарафынан быйыл 27 июндә ҡабул ителгәйне. Республика парламентының һуңғы ултырышында, 28 ноябрҙә, ҡануниәтселәр уны һуңғы уҡыуҙа хупланы.

Закон льготалы торлаҡ алыуға дәғүә итеүсе граждандар исемлеген төҙөү процедураһының асыҡлығын арттырыуға йүнәлтелгән. Документта төп мәсьәләләр - бындай күсемһеҙ милеккә кемдең хоҡуғы бар, ғаризалар нисек бирелә, иҫәпкә алына һәм ҡарала, аукциондар һөҙөмтәләре тураһында протокол менән билдәләнгән шарттарҙа эконом-класс торлағы һатып алырға ризалашҡан граждандар исемлеге нисек төҙөлә - барыһы ла тәфсирләп яҙылған.

Хәҙер бөтә ғаризалар биргән көндән һәм ваҡыттан сығып сиратҡа тороу тәртибендә теркәлергә тейеш. Ғариза биргәндән һуң ун эш көнө эсендә урындағы үҙидара органы гражданды исемлеккә индереү тураһында ҡарар ҡабул итергә һәм уға был ҡарар тураһында яҙма рәүештә хәбәр итергә тейеш. Законда шулай уҡ эконом-класс торлағына сиратҡа индереүҙе кире ҡағыу сәбәбе лә ентекле яҙылған.

Эконом-класс торлағы төҙөү өсөн тапшырылған ер участкаһы урынлашҡан территорияларҙы билә мә, ҡала округы башлығы торлаҡ алырға ризалашҡан граждандар исемлеген раҫлай. Шулай уҡ ул эконом-класс торлағы һатып алырға ризалашҡан граждандар исемлеге баҫылырға тейешле рәсми киң мәғлүмәт сараһын да билдәләй.

Яңы закон эконом-класс торлағы һатып алыуға ғариза биреү, иҫәпкә алыу һәм ҡарауҙың аныҡ һәм асыҡ тәртибен раҫлай, яҡтарҙың хоҡуҡтарын һәм бурыстарын билдәләй.

**Людмила ТЕРНОВАЯ.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЙӘРМИНКӘЛӘР САҠЫРА

**14 декабрҙән Өфөлә һәр ваҡыттағыса яңы йыл алды ит йәрминкәләре башлана. Йәрминкәләр шәмбе һәм йәкшәмбе көндәрендә 29 декабргә тиклем кәмендә 10 сауҙа майҙансығында уҙғарыласаҡ.**

2012 йылдың декабрендә Өфөләге ит баҙарҙарында һатылған продукция күләме 258,6 миллион һум тәшкил иткәйне. Дөйөм алғанда, ул саҡта һатыуға 1016 тонна ит килтерелде. Тәҡдим ителгән ит күләменең күпселеге һыйыр ите - 572 тонна. Бынан тыш, ит йәрминкәләре ваҡытында ауыл халҡы Өфөгә 271 тонна сусҡа, 111 тонна йылҡы, 62 тонна һарыҡ һәм 72 тонна ҡош-ҡорт ите килтерҙе.

Шул уҡ ваҡытта Яңы йыл алды йәрминкәләрендә тауыҡ һәм ҡаҙ ите айырыуса ҙур һорау менән файҙаланылды - 33 һәм 25 тонна. Күркә һәм өйрәк ите өфөләләргә 11 һәм 6,5 тонна күләмендә тәҡдим ителде. Шулай уҡ ҡышҡы йәрминкәләрҙә һатыуға 23 тонна бал сығарылды, тип хәбәр иттеләр Өфө хакимиәтенең сауҙа һәм хеҙмәттәрҙе яраштырыу идаралығында.

# ЭШЛЕКЛЕЛЕККӘ ӨЙРӘТӘЛӘР

**Башҡортостан Республикаһының Сауҙа-сәнәғәт палатаһы уҡыусылар һәм студенттар өсөн бизнес-мәктәп аса. Курс быйыл декабрҙә башлана һәм ун аҙна дауам итәсәк. Был турала БР Сауҙа-сәнәғәт палатаһы президенты Юрий Пустовгаров хәбәр итте.**

Проектта ҡатнашыусылар тәғәйен предприятиеларҙа бизнес-процестар менән таныша аласаҡ, ә уларҙың етәкселәре уңыш серҙәре менән бүлешеү генә түгел, ҡыйынлыҡтар, уларҙы енеп сығыу алымдары тураһында һөйләйәсәк. Дәрестәрҙе ял көндәре үткәреү планлаштырыла. Программа нигеҙендә - тренингтар һәм уйын формаһында моделдәр төҙөү, лекциялар, эксперттар менән түңәрәк өҫтәлдәр, индивидуаль һәм команда менән проекттар эшләү. Уҡыу тамамланғандан һуң балаларҙың Сауҙа-сәнәғәт палатаһында эшләй башлау, белгестәр командаларының береһенә элегеү мөмкинлеге бар

- Уҡытыу бурысы - үҙең тирәләй "башҡа мейеле" йәштәрҙән даирә булдырыу, - тип билдәләне Юрий Пустовгаров. - Бизнес-мәктәп Өфөлә генә түгел, республиканың башҡа ҙур ҡалаларында эшләйәсәк, тип планлаштырыла.

Бизнес-мәктәптә уҡытыу түләүле. Беренсе этап - туғыҙ мең һум. Тулы мәғлүмәттәр - БР Сауҙа-сәнәғәт палатаһы сайтында.

**"Башинформ"дан.**

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин 2014 йылдың 1 ғинуарынан Рәсәйҙә минималь эш хаҡын айына 5554 һум күләмендә билдәләү тураһында законға ҡул ҡуйҙы. Әлеге ваҡытта минималь эш хаҡы күләме 5205 һум тәшкил итә. Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, 2013 йылда минималь эш хаҡы күләме менән эшкә яраҡлы халыҡтың йәшәү минимумы нисбәте 67 процент тәшкил итәсәк. 2018 йылға минималь эш хаҡы күләме эшкә яраҡлы халыҡтың йәшәү минимумын тәьмин итәсәк, тип планлаштырыла. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, хәҙер ул 7800 һум самаһы тәшкил итә.

✓Башҡортостан инвалидтар өсөн уңайлы мөхит булдырыуға федераль бюджеттан 100 миллион һумдан ашыу аҡса ала. Республика үҙе лә шул тиклем үк сумма бүлә. БР хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова әйтеүенсә, инвалидтар өсөн уңайлы мөхит булдырыу буйынса проекттарҙы тормошҡа ашырыу киләһе йылда тағы ла әүҙемерәк алып барыласаҡ, сөнки финанслау күләме федераль ҡаҙнанан бүленгән аҡсалар иҫәбенә һиҙелерлек артасаҡ. "Уңайлы мөхит" төшөнсәһе - ул пандустар төҙөү генә түгел, шулай уҡ мәғлүмәти һәм социаль-мәҙәни шарттар булдырыу ҙа.

✓Төньяҡ йүнәлеш маршруттары буйынса автобустар хәрәкәте 3 декабрҙән тергеҙелде, тип хәбәр иттеләр "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһынан. Төньяҡ автовокзалда ("Төньяҡ" касса пункты) Башҡортостан халҡы республика буйынса һәм унан ситтә төрлө йүнәлешкә билеттар һатып ала, транспорт карталарын тулыландыра ала. Касса пунктының эш ваҡыты көн һайын 7 сәғәт 30 минуттан 19 сәғәт 40 минутҡа тиклем, тәнәфес - 13 сәғәттән 14 сәғәт 45 минутҡа тиклем.

✓"Өфө" халыҡ-ара аэропорты 2013 йылдың 11 айы йомғаҡтары буйынса былтырғыға ҡарағанда 16 процентҡа күберәк пассажирҙарҙы хеҙмәтләндерҙе. Пассажирҙарҙың дөйөм иҫәбе 2 миллион 49 меңдән ашып китте. Төп үҫеш халыҡ-ара йүнәлештәрҙә теркәлгән: сит илгә осоусылар 354 мең кешенән ашыу тәшкил итте (үҫеш 32 процент), 353 мең кеше ҡабул ителде. Самолеттарҙың осоу һаны ла артты: 13 мең 280 осоу-ултырыу операцияһы башҡарылды, был 2012 йылдың 11 айына ҡарағанда 15 процентҡа артыраҡ.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# СИБАЙҘА ТАҒЫ БЕР ҺӘЙКӘЛ



**Сибайҙа күренекле йәмәғәт һәм сәйәси эшмәкәр, ғалим-тюрколог Әхмәтзәки Вәлиди Туғанға 2000 йылда асылған бюсты реконструкциялау тамамланды, хәҙер уны Әхмәтзәки Вәлидиҙең данлы эштәре тураһында яҙылған стилле таҫма биҙәй.**

Сибайҙа плитка менән көпләнгән постаментҡа ҡуйылған бюст 13 йыл эсендә яраҡһыҙ хәлгә килде. Ремонт эштәре үткәреү башланғас, Сибай ҡала хакимиәте постаментҡа тарихи белешмә өҫтәргә ҡарар итә. Күләмле хәрефтәр металл иретмәһенән ҡойолған, мәғлүмәт ике телдә - башҡортса һәм русса - бирелгән. Реконструкцияның авторы - урындағы скульптор Сергей Апарин, тип хәбәр иттеләр ҡала хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлегенән.

# ЙОЛАЛАР ТӘРБИӘЛӘЙ...

**Благовар районының Һарайлы ауылында "Тылсымлы һандыҡ" фольклор байрамы һәм "Һылыуҡай-2013" башҡорт һылыуҙары конкурсы үтте.**

Сараны ойоштороуҙа һәм үткәреүҙә Ҡәнзәфәр бей исемендәге "Һарайлы" башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге хеҙмәткәрҙәре әүҙемлек күрһәтте. Үҙәк хеҙмәткәрҙәре "Тылсымлы һандыҡ" фольклор байрамының "Урындағы ғөрөф-ғәҙәттәр нигеҙендә үҙенсәлекле йола" номинацияһында театрлаштырылған "Ямғыр саҡырыу" башҡорт милли йолаһын сәхнәләштергәйне. Әҙәр "Һылыуҡай-2013" конкурсында ҡатнашыусы йәш сибәркәйҙәр алдына башҡорт телендә һөйләшеү, башҡорт халҡының йолаларын һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен белеү оҫталыҡтарын, ижади һәләттәрен күрһәтеү бурысы йөкмәтелгәйне. Балалар был бурысты еренә еткереп үтәп, үҙенсәлекле сығыштары менән һөйөндөрҙө.

# БЕҘҘЕҢ СТУДЕНТТАР ЕҢЕҮСЕ

**Башҡорт дәүләт аграр университеты Барнаулда үткән Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығы вуздарының VII Бөтә Рәсәй махсус студент отрядтары слетында ҡатнашты. Слет беренсе тапҡыр Урал аръяғында үткәрелә, элек уны Рязань, Волгоград, Кострома, Мәскәү һәм Өфө ҡабул итте.**

Башҡорт дәүләт аграр университеты исеменән хеҙмәт отрядтары штабы етәксеһе, "Башаҡ" махсус студенттар отряды командиры Азат Шәрәфетдинов, "Башаҡ"тың комиссары, механика факультетының III курс студенты Динар Хафизов һәм Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығы вуздарының махсус студент отрядтары ветерандар советы рәйесе Рим Әбләйев ҡатнашты.

Слет һөҙөмтәләре буйынса студент отрядтары эшмәкәрлеген иң яҡшы ойоштороусы аграр вуздарҙың исемдәрен иғлан иттеләр. Был конкурста Рәсәйҙең бөтә 59 аграр юғары уҡыу йорто ҡатнашты. Башҡорт дәүләт аграр университетының "Башаҡ" махсус студенттар отряды конкурс һөҙөмтәләре буйынса "Студенттар отрядтары эшмәкәрлеген иң яҡшы ойоштороусы юғары уҡыу йорто" номинацияһында икенсе урын яуланы.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ТӘМӘКЕСЕГӘ...

## штраф артты

**Ошо йылдың 15 ноябренән тыйылған урындарҙа тәмәке тартҡан өсөн штраф янай. Әйткәндәй, вокзалдарҙа, туҡталыштарҙа, мәктәп биләмәләрендә, дауаханаларҙа тартыу 1 июндән үк тыйылғайны инде, ләкин тәмәкеселәр быны ҡолағына ла элергә теләмәне. Ә тәртип һаҡсылары яурындарын ғына һикертте: закон бар ҙа бит, ә административ яуаплылыҡ юҡ. Юридик яҡтан ҡарағанда, штраф һалырлыҡ сәбәп тә юҡ һымаҡ...**



Ошо тәңгәлдә закон сығарыусылар эштең ниҙә булыуын һиҙеп ҡалып, Административ кодексҡа төҙәтмәләр индерә һалды. Яңы ҡағиҙәләр 15 ноябрҙән көсөнә инде - хәҙер закон боҙоусы тәмәкеселәрҙе 500-ҙән алып 3000 һумға тиклем штраф яҙаһы көтә.

- Тәмәкеселәр менән көрәштә полиция иң һуңғы сик булырға тейеш, - тиҙәр Рәсәй Эске эштәр министрлығында. - Беренсе сиратта быны менән Роспотребнадзор һәм башҡа ведомстволар шөғөлләнергә тейеш. Ә инде уларҙың хәленән килмәй башлаһа йәки уларға буйһонорға теләмәһәләр, эшкә беҙ тотонорбоҙ...

Киләсәктә быныһы буйынса ла асыҡлыҡ индерелер, тип өмөт итәйек. Ә хәҙергә тағы иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: **йәмәғәт урындарында, балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә, юғары уҡыу йорттарында; торлаҡ йорт подъездарында, мәҙәниәт учреждениелары биләмәләрендә, ҡала һәм ҡала яны транспортында, спорт объекттарында, дәүләт власы органдары һәм урындағы үҙидарлыҡ биналарында, махсус хеҙмәттәр биналарында, эш урындарында, ябыҡ биналарҙа, вокзалдар һәм порттар биналарында, пассажирҙар платформаларында, төрмә, СИЗО биналарында, медицина учреждениелары биләмәләрендә, балалар майҙансыҡтарында, пляждарҙа, метрола тәмәке тартыу тыйыла. Был тыйыуҙарға буйһонмағандарға, әйтеүебеҙсә, 500-ҙән алып 3000 һумға тиклем штраф һалына.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҠАБАТТАН ИҪӘПЛӘТЕРГӘ БУЛА

**Мин өлкән йәштәге кеше. Көндәр һалҡынайтҡан һайын, фатиремда ла һыуыҡыраҡ була бара, өшөйөм. Ә бит йылытҡан өсөн тулыһынса хаҡ түләтәләр. Өй эсендә гел көптәй кейенеп, төрөнөп йөрөү ҙә бик яйлы түгел. Кемгә, ҡайҙа мөрәжәғәт итергә?**

Санитар нормаларға ярашлы, фатирҙағы һауа температураһы, тәҙрәләрегеҙ һәм ишектәрегеҙ йылытылған шарттарҙа, мөйөштәге бүлмәлә +20, тәүге йыл файҙаланылыусы йортта +20, бүлмәләрҙә +18, кухняла +18, ванна бүлмәһендә +25, вестибюль, баҫҡыс майҙансыҡтарында +16 градустан да түбәнерәк булырға тейеш түгел. Йортҡа йылылыҡ биреү торошона ҡарата дәғүәләр булған хәлдә, үҙегеҙҙең идарасы компаниянан фатирға түләүҙе ҡабаттан иҫәпләүҙе талап итә алаһығыҙ. Түләү күләме 0,15 процентҡа кәметелә, әгәр йылылыҡ биреүҙәге өҙөклөктәр рөхсәт ителгән кимәлдән артып киткән һәр бер сәғәт өсөн иҫәпләнһә. Рөхсәт ителгән өҙөклөк - бер айҙа 24 сәғәттән дә кәм түгел.

Әгәр идарасы компания һеҙҙең мөрәжәғәтте яуапһыҙ ҡалдырһа, Торлаҡ күҙәтеүе буйынса дәүләт комитетына яҙа алаһығыҙ. Адресы: 450059, Өфө ҡалаһы, Степан Халтурин урамы, 28.

Тағы бер иҫкәрмә: ҡайҙалыр мөрәжәғәт итерҙән алда бер нисә көн буйына фатирығыҙҙағы һауа температураһын үлсәп, яҙып барығыҙ. Термометр иҙәндән 1 метр (ләкин 1,5 метрҙан да юғарыраҡта түгел) арала эленеп торорға тейеш. Идарасы компания вәкилдәрен саҡырып, улар ҡатнашлығында иң һалҡын бүлмәләге температураны үлсәгеҙ һәм акт төҙөгөҙ. Унда күршеләрегеҙ йәки саҡыртып килтерелгән шаһиттарҙан ҡул ҡуйҙырығыҙ.

# УЙЛАМАЙ ЭШ ИТҺӘҢ...

**1995 йыл улым үҙе менән граждандыҡ никахында йәшәгән ҡатындың улын уллыҡҡа алды, унан никахтарын рәсми рәүештә теркәнеләр, ләкин 2003 йылда айырылыштылар. Суд улымды атайлыҡ хоҡуғында ҡалдырҙы һәм уға 2011 йылға тиклем (бала балиғ булғансы) алимент түләргә тура килде. Хәҙер инде улым был баланан баш тарта аламы? Ул шулай уҡ баланың үҙ (биологик) атаһы йә әсәһе фамилияһына күсеүен дә талап итергә теләй. Был мөмкинме?**

РФ Ғаилә кодексының 144-се статьяһына ярашлы, талап ителгән ваҡытҡа ҡарата уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алынған бала балиғ булған осраҡта уллыҡҡа алыуҙы юҡҡа сығарыу рөхсәт ителмәй (уллыҡҡа алыусының һәм уллыҡҡа алыныусы баланың, шулай уҡ уның үҙенең атаәсәһенең, әгәр улар иҫән булған хәлдә һәм атаәсә хоҡуғынан мәхрүм ителмәгән булһалар, үҙара ризалыҡтары булған осраҡтарҙан тыш). Суд тәртибендә баланың икенсе фамилияға күсеүен талап итеү ҙә мөмкин түгел. Шунлыҡтан, әгәр киләсәктә был бала улығыҙҙың милкенә мираҫсы (варисы) булыуын теләмәһәгеҙ, ул алдан хәстәрлек күрә ала, йәғни үҙенең милкен яҡындарының береһенә васыят итергә йә башҡа төрлө хәл итеү юлын һайларға хоҡуҡлы.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Тоҙ кәрәк

❖ Ҡайһы берҙә мунсанан һуң хәл бөтә, сөнки организмдан тир менән бергә тоҙ күпләп сыға. Шуға күрә мунсаға инер алдынан бер кисәк тоҙло балыҡ, йәки тоҙло ҡыяр ашарға кәрәк.

## Сәй содаһы

❖ Бер стакан һыуға бер семтем сәй содаһы, лимон һуты ҡушып эсһән, ашҡаҙандағы әселекте кәметә, газдан бушандыра, эс китеүен бөтөрә, ә содалы ванна ҡан әйләнешен яҡшырта, тирене йомшарта.

## Тын алыу юлдары

❖ Тын алыу юлдары ауыртһа, 10 баш һуғанды, 1 нарыҫһаҡты ваҡлап турарға, 1 литр ҡайнар һөттә 2-3 минут ҡайнатырға, бер аҙ бөтнөк һыуы һәм 1-2 ҡалаҡ бал өҫтәргә. Көнө буйы шуны 4-5 мәртәбә йылы көйөнә ярты стаканлап эсергә.

## Гөлиемеш тамыры

❖ Гөлиемеш тамырынан яһалған төнәтмә бөйөрҙәге таштарҙы иретергә ярҙам итә. 2 ҡалаҡ ваҡланған тамырға 200 мл ҡайнаған һыу һалып, 15 минут ҡайнатырға. Төнәтеп һөҙөргә. 7-10 көн дауамында көнөнә 3 мәртәбә 1-әр стакан эсергә.

## Ревматизм

❖ Ревматизм менән сирләүсене урынға яткырып, арҡаһын грелка менән йылытырға. Гәзиткә резина елемен тюбиктан һығып сығарып бөткәс, гәзитте икегә бөкләргә һәм ауырткан ергә бәйләргә, өҫтөнән бәрәй йылы әйбер ябырға. Сирле күпме түҙә, шулай тоторға. Был алымды 1-2 тапҡыр эшләһәң, сир һыпырып алғандай бөтә.

❖ Шешәнең яртыһына тиклем ҡырмыҫҡа һалырға ла, өҫтөнә тулғансы спирт йәки араҡы ҡойорға, бер нисә көн йылы ерҙә төнәтергә. Төнәтмәне иртән һәм кис ярты-бер балғалаҡ эсергә.

❖ Дарыуханалағы ҡырмыҫҡа спиртын ошо төнәтмә урынына ҡулланырға була.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Ҡыҙылса имләү

**Ҡыҙыл әйбер име.** Ҡыҙылса ун ике ағанаң беренен алам тип килә икән. Уның атаһы һәм инәһе була. Ҡыҙылсаға ҡыҙыл әйбер элеп ҡуйғандар. Ҡыҙыл шаршау, ҡыҙыл һөлгө, ҡыҙыл юрған ҡулланғандар. Ҡыҙылсаны ҡыҙыл әтәс һуйып та имләгәндәр. Әтәсте баштан әйләндереп, ҡанын ауырыған кешегә һөрткәндәр.

**Ыуыҙ һөтө име.** Кеше ҡыҙылса менән ауырыһа, нык әсегән ҡымыҙҙы, ҡыҙыл көртмәлене, баланды, ҡыҙыл ҡарағатты яңы бәпәйләгән ҡатындың ыуыҙ һөтөнә ҡушып биргәндәр. Ауырыуҙың эргәһенә ҡыҙыл шаршау элгәндәр, сит-ятты индермәгәндәр.

**Ҡыҙылсанан ҡыҙыл емеш.** Ҡыҙылса сыҡҡан кешегә (йәй) бөрләгән кеүек ҡыҙыл емеш ашаталар.

*Бәндә - сәбәпсе, Алла - сихәтсе,*
*Бәндә - сәбәпсе, Алла - сихәтсе,*
*Бәндә - сәбәпсе, Алла - сихәтсе,*
*Аллам, үҙеңдән ярҙам!*
*Сихәттәреңде бир!* - тип әйтәләр. Шунан ауырыу һауыға.

**Ҡыҙамыҡ сәсәге.** Ҡыҙамыҡ ҡалҡҡанда һыуыҡ һыу эсергә ярамай. Өс көн ҡалҡа, өс көн бата ул.Шул арала ауырыуҙы һәйбәтләп һаҡларға кәрәк. Ҡыҙамыҡ һүнгән ваҡытта, кеше һыуыҡ һыу эсһә, сыҙамай, күгәреп үлә. Ҡыҙамыҡ менән сирләгәндә доға уҡып, ҡыҙыл сепрәк менән ҡаплап ҡуялар.Сәсәк сыҡһа, тырнарға ярамай. Шаҙра булмаһын өсөн ауырыуҙың ҡулын бәйләйҙәр. Тиҙ сығып, тиҙ бөтһөн өсөн, ҡыҙамыҡҡа ҡыҙыл әйбер ябырға кәрәк. Ауырыу кешене йылы ергә һалалар. Тәне һыуынһа, кеше үлә. Ҡыҙамыҡ эскә батһа, кеше күгәреп китә. Ҡыҙамыҡ менән ауырыған кешене мунса индерергә ярамай.

Ҡыҙамыҡ ауырыуынан:

● Тәнгә ҡыҙамыҡ сәсәге сыҡһа, һүҙ бирәләр: "Иҫән-һау терелһәм, ҡыҙыл күлдәк бирермен, ҡыҙыл әтәс һуйырмын".

● Ҡыҙамыҡ сыға башлаһа, ҡыҙыл әйбер менән ҡаршы алырға кәрәк - ҡыҙыл сепрәк, ҡыҙыл күлдәк, ҡыҙыл яулыҡ... Оҙатҡанда, ярма менән оҙаталар. "Име-томо шул булһын, китһен, сәселһен..." - тип һамаҡлайҙар.

● Ҡыҙамыҡ сыҡһа, уның инәһен "эшләйҙәр". Бының өсөн бер һауытҡа икмәк киҫәге һалалар, шунан "Ҡыҙамыҡ инәһе" аһайҙар. Уны имләүсе әбейгә биреп имләтәләр. Шунан һуң ҡыҙамыҡ китә, имеш... Һуңынан уны имләүсе әбейгә биреп ебәрәләр. Ҡыҙамыҡты имләгәндә хайуан һуйырға ла, ташларға ла, хатта ҡысҡырып һөйләшергә лә ярамай.

● Ҡыҙамыҡ менән ауырыған кешенең буйына ҡыҙыл епте үлсәп алып, уны берәй әбейгә хәйер итеп бирәләр.

● Тулы ай ҡалҡҡас, ауырыуҙы ҡыҙыл сепрәккә төрөп, түшәккә һалалар. Ошо әпсенде:

*Ҡыҙамыҡ, ҡыҙамыҡ, һиндә генә ғәйрәт-көс!*
*(Фәлән) тәненән һикереп төш,*
*Ошо ҡыҙыл сепрәккә күс!* - тип, ҡыҙыл сепрәкте ташлайҙар.

## Сәсәк ауырыуынан им-том

**Сәсәк бутҡаһы име.** Сәсәк ауырыуын Сәсәк инәһе ебәрә икән. Шуға сәсәк ҡалҡһа, Сәсәк инәһенә бағышлап, ауырыуға бутҡа бешереп ашаталар. Ул бутҡаны Сәсәк бутҡаһы тиҙәр. Сәсәк бутҡаһын ашатҡанда ошондай әпсен дә әйтелгән:

*Көл кеүек осһон,*
*Көбәк кеүек кипһен,*
*Болот кеүек таралһын,*
*Име-томо шул булһын!*

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

КӨН КҮРГӘН ШӨҒӨЛ

# ҠУЛ КӨСӨНӘ ШӨКӨР -

## геүләтеп донъя көттөрә

**Эргә-тирәбеҙҙә ниндәй генә кешеләр йәшәмәй. Һәр ҡайһыһының үҙ холоҡ-фиғеле, тормошҡа ҡарашы, уй-фекере бар. Берәүҙәр үҙ алдына ҙур маҡсаттар ҡуйып, ғүмер буйы шуға ынтылып йәшәһә, икенсе береһенең аныҡ ҡына уй-ниәте лә булмай. Ә өсөнсөләре иһә, тирә-йүндәге хәл-ваҡиғаларҙы дөрөҫ баһалай белеп, үҙ көсөн, хәлен яҡшы самалап йәшәй белә. Нәҡ бына ошо өсөнсөләре хәленән килмәгәнгә ынтылмай, үҙе белгәнсә, һәүетемсә генә донъя көтөп, ҙурыраҡ уңыштарға өлгәшә лә инде. Ундайҙарҙың тормошо ла көйлә, донъяһы ла ныҡлы була.**



Күптәргә өлгө булған, егәрлелеге менән һоҡланыу уятҡан ошондай кешеләрҙең береһе Таһира Мөждәбә ҡыҙы Хөсәйенова Әбйәлил районының Ғәбдин ауылында йәшәй. Уның йорто, алыҫтан уҡ балҡып, үҙенә саҡырып ултыра. Йорттағы тәртип, таҙалыҡ әллә ҡайҙан күҙгә салына. Бөтә ер аллы-гөллө сәскәләргә, емеш ағастарына күмелгән. Май сулмәге тышынан билдәле, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр шул. Йорт-ҡураның тәҙәклөгө хужаларҙың уңғанлығына, зауыҡына ҙур баһа булып тора.

Таһира апай Хөсәйенова үҙ еренең ҡәҙерен белеп, уға берегеп йәшәүселәрҙең береһе ул. Булыр бала биләүҙә үк үҙен күрһәтә, тиҙәр. Таһира апай ҙа бала саҡтан уҡ эш рәте белеп, хеҙмәт һөйөп үҫә. Ауыл мәктәбен тамамлағас, һауынсы булып эшләй. Йәмәғәт эштәрендә, ауыл тормошонда ҡайнап йәшәгән Таһира Мөждәбә ҡыҙы тормош иптәше Әбделхәй Бәхтийәр улы менән 4 бала тәрбиәләп үҫтерә. Әбделхәй ағай ҙа ғүмере буйы колхозда эшләп, ауылдаштары алдында хөрмәт яулаған тырыш колхозсыларҙың береһе була. Бөгөн уларҙың матур тәрбиәһен алып үҫкән балалар ата-әсәһе йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәй, тормошта үҙ урынын табып, лайыҡлы донъя көтә. Ҡайһы берәүҙәр тормош ауыр, аҡса етмәй тип төшөнкөлөккә бирелгәндә, бер нәмәгә ҡарамай гөрләтеп донъя көтөүсе Таһира апай кеүектәр дәүләткә генә ышанып, булмағанды көтөп ултырмай. Көртә тултырып мал аҫрай, ҡош-ҡорт үрсетә, гөрләтеп баҡсаһын да үҫтерәләр. Таһира һәм Әбделхәй Хөсәйеновтар ҙа ауыл тормошононоң бар мөмкинлеген файҙаланып, үҙ донъяһын гөл итеп йәшәй белеүсе йүнселдәр рәтенән. Үкенескә күрә, күптәргә өлгө булып йәшәгән ғаилә башлығы быйыл йәй яҡты донъянан китеп бара.

- Ауылда йәшәп, мал тотмай, баҡса үҫтермәй йәшәүҙе күҙ алдына ла килтермәйем. Әлбиттә, матур, етеш донъя көтәм, тиһәң, иртә таңдан ҡара кискәсә йүгерергә тура килә. Һыйырҙың ағын, баҡсалағы емештәрҙе лә ваҡытында эшкәртеп, ризыҡ итеү өсөн әллә күпме ваҡыт, көс китә. Һәр нәмәнең үҙ мәле. Барыһына ла ваҡытында иғтибарыңды бүлеп, тәрбиәләгәндә генә килемен дә алаһың, файҙаһын да күрәһең. Тырышлыҡ бер ҡасан да бушҡа булмай. Ҡулың ҡыбырлап, аяғың йүгергәндә генә етеш тә булаһың, балаларыңа ла ярҙам итеү форсатын табаһың, - ти Таһира апай.

Үҙендеке бәрәкәтле лә, файҙалы ла була тип һанай һәм мотлаҡ үҙ хужалығын булдырып, барыһына ла өлгөрөп йәшәргә тырыша мәкәләбеҙ геройы. Бөгөн һыйыр, тана-торполары менән бергә 16 баш эре мал, һарыҡ-кәзә, 45-ләп ҡаҙ, 30-ға яҡын өйрәк, бик күп тауыҡ, күркә аҫрай, күпләп умарта тота. Бынан тыш, ҙур баҡса ҡарарға ла өлгөрә ул. Тырыш ғаилә һәр йыл һайын гектарҙан ашыу картуф сәсә, ә инде емеш ағастарының иҫәбе-хисабы ла юҡ. Егәрле Таһира апайҙың баҡсаһында йөҙөм, слива, ҡарбуҙ, ҡауынына тиклем урын бар. Үҫтергән, тәрбиәләгәндәрен ауыл буйлап осһоҙ ғына хаҡҡа майлы ҡалъя эҙләп йөрөүселәргә биреп ебәрмәй, баҙарға, көҙгө йәрминкәгә алып барып һатыуҙы хуп күрә улар.

Тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫ йорт мәшәҡәттәренән тыш, күңел зауығын ҡәнәғәтләндерерҙәй яратҡан шөғөлдәре лә бихисап унған хужабикәнең. Йорт эсен сигелгән, бәйләнгән түшәк-мендәрҙәр, япмалар, таҫтамал, алъяпҡыстар биҙәй. Йәш саҡтан ҡул эшенә оҫта булған Таһира апайҙың бәйләгән шәлдәрен дә кемдәр генә иңенә һалмаған да, кемдәр генә уның ҡул йылыһын тоймаған икән. Балаларының юғары белем тураһында алған дипломына ла әсәй кешенең әллә күпме күҙ нуры түгелеп, ҡул көсө һалынған. Йүнсел ғаиләлә тәрбиәләнгән балалар ҙа, атай- әсәй өлгөһөндә хеҙмәт һөйөп, эш рәте белеп үҫә.

-Ҙур хужалыҡ алып барыуҙа балаларымдың ярҙамы ҙур. Килһә, береһе лә тик ултырмай. Ҡалала йәшәһәләр ҙә, ялға ҡайтҡан саҡтарында ғына ла әллә күпме эште бөтөрөп китәләр. Баҡсалағы емеш-еләкте, йәшелсәләрҙе эш итеүҙә лә, бесән, һуғым, ҡаҙ өмәләре осоронда ла бары тик балалар ярҙамына ғына таянабыҙ. Аллаға шөкөр, балаларым да, килен-кейәүҙәрем дә тырыш, эш айырып тормай. Ҡул ҡаушырып ултырмағанда ғына етеш, матур йәшәп булыуын яҡшы аңлайҙар. Йәй көндәрендә йорт мәшәҡәттәренән тыш, еләк-емеш, бәшмәк йыйып һатырға ла, ҡул эштәре менән булышырға ла өлгөрәләр, - ти Таһира апай.

Тормошта унып йәшәүенең сере, тәү сиратта, атай-әсәһенең дөрөҫ тәрбиә биреүендә, тип һанай Таһира Хөсәйенова. Был, һис шикһеҙ, шулайҙыр, сөнки Таһира апайҙың ошо уҡ ауылда йәшәүсе Килмөхәмәт, Зәйнулла ҡустыларының, Рәшиҙә, Фатиха килендәренең тормошо ла күптәргә өлгө булырлыҡ. Йорт-ҡуралары тәҙәк, матур, унған хужалар йәшәүен белдереп балҡып ултыра. Уларҙың атаһы, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Мөждәбә Мәғәсүм улы йәш сағында ауылдың тырыш, адынғы кешеләренең береһе була. Спортсы, баҡсасы, яҡшы һунарсы, умартасы тигән даны сыҡҡан 86 йәшлек аҡһаҡал бөгөн дә балаларының яҡын кәңәшсеһе, терәге.

Әйе, тормош дилбегәһе һәр әҙәм балаһының үҙ ҡулында. Һәр кем донъяһын үҙенә генә хас буяуҙар менән биҙәп йәшәргә тырыша. Шулай ҙа, изге уйҙар, яҡшы ниәттәр менән хеҙмәттән йәм һәм тәм табып йәшәүселәрҙең генә тормош биҙәге сағыуыраҡ та, нурлыраҡ та килеп сыға.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ

## ЗАРЛАНЫУҘАН ДОНЪЯ ҠОТАЙМАЙ

- Күп телдәр өйрәнһән дә үҙ телеңде бейеккә сөй, ят-иләмһеҙ һүҙҙәр менән сүпләмә.
- Бөйөк асыш яһаған ғалимдар ҙа үҙ телендә фекерләй.
- Туйған ергә туғыҙ кил, унынсыһын уйлап бел.
- Берҙе һаҡлау өсөн өстө юғалтыу ҙа йәл түгел.
- Юлда табылған юлда ҡала, өйҙә тапһаң, кеҫәгә юл ала.
- Башың булмаһа, аяҡ аҫтындағы хазинаңды ла тапап һытаһың, сит-ятҡа һатаһың.
- Власть халыҡтан алыҫайған һайын, аралағы соҡор тәрәнәйә.
- Ағылыйға-тағылыйға ҡунаҡтан ары тор - эйәләшеп, тәкәтеңде ҡоротор.
- Бер табыш икенсе эҙләнеүҙәргә әйҙәй.
- Тешләһәң, өҙә тешлә, һуҡһаң, ергә һеңдер, әйтһәң, үҙәген әсеттер.
- Үҙ башың булмаһа, таяҡ та бирә һабаҡ.
- Эшең башла төш көтмәй, ашың аша кеше көтмәй.
- Ғүмер юлы - тирмән ташы: теше бөтһә, зым-зый туҡтай.
- Һәрмәүес дуҫтан һаҡ бул - һуңғы ҡабымыңды ла һәрмәр.
- Зарланыуҙан донъя ҡотаймай, ваҡыт ҡына заяға үтә.
- Ғәйепте башҡаларға япһарыу - ҡурҡаҡтар шөғөлө.
- Уңышһыҙлыҡтан фәһем алғанда ғына ҙур уңыш ҡаҙанып була.
- Фекерҙәштәр тап - эштәрең тиҙ хәл ителер.
- Башҡаларға оҡшарға тырышыу - аумаҡай һәм ялағайҙар һөнәре.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ Шул уҡ ваҡытта ғалимдың милли тойғолары Башҡортостан менән генә сикләнеп ҡалмай. Ул ғөмүми төрөк донъяһы патриоты һәм ғалимы. Был тәңгәлдә лә уның яҙмышын дөрөҫ аңлау өсөн киң тарихи ҡараш талап ителәү.



ВӘЛИДИ ХАҠЫНДА ҺҮҘ

**Әхмәтзәки Вәлиди тураһындағы иҫтәлектәрҙе тыуған илгә ҡайтарыу өсөн күп көс һалған шәхесебеҙ, философия фәндәре кандидаты Әмир ЮЛДАШБАЕВ менән "Вәлиди хаҡында һүҙ" рубрикаһында алып барылған әңгәмәләребеҙҙе дауам итәбеҙ.**

# АҠТАМЫРҘАЙ ХАЛҠЫБЫҘ...

## Өсөнсө һүҙ: "Вәлидигә үҙебеҙ, киләһе быуындарыбыҙ мохтаж..."



**Һорау: Үҙгәртеп ҡороуҙар башланған саҡта Ә.Вәлиди башҡорт милләтсеһе, татар ғалимы тигән фекер ҙә булды хатта. Ошоға оҡшаш фекерҙәр әлегә тиклем ишетелеп ҡала. Ғөмүмән, бындай фекерҙәрҙең нигеҙен ниҙә күрәһегеҙ? Улар нигеҙлеме, әллә башҡа төрлө сәйәси маҡсатта әйтеләме?**

- Төркиәгә бер нисә тапҡыр барып, ғалимдың бай мираҫы менән танышып, уны оҙаҡ йылдар белгән кешеләр менән аралашҡандан һуң, мин бер нәмәгә бик ныҡ ғәжәпләнгәйнем. Әхмәтзәки Вәлидиҙә булған көслө башҡортлоҡ тойғоһо Башҡортостанда мин белгән бер генә башҡортҡа ла хас түгел. Милли хистәре ҡеүәтле булған шәхестәребеҙҙең тереләрен дә, вафат булғандарын да яҡшы беләбеҙ, ихтирам итәбеҙ. Ләкин был тәңгәлдә Вәлидигә хас ялҡын мин белгән кешеләрҙең береһендә лә былай уҡ көслө түгел. Был иһә беҙҙе тәрән уйға һалырлыҡ, хайран ҡалдырырлыҡ хәл. Әллә Әхмәтзәки Вәлидиҙең үҙ шәхси сифаты ғынамы был? Әллә был беҙ өлөшләтә юғалтып өлгөргән ҡеүәтле рухи тамырҙарыбыҙ булыуы хаҡында һөйләүсе сағыу күренешме? Күрәһең, уның рухында инҡилаптар дәүерендә башҡорт зыялылары һәм башҡорт халҡында йәшәгән, Шәйехзада Бабич кеүек шәхестәрҙе лә йәлеп иткән көслө милли үҙаң һаҡланғандыр. Тимәк, ундай рух совет дәүерендә бик күп төрлө факторҙар баҫымында үҙебеҙҙә ярайһы һүрелгән булып сыға. Уны яңынан тергеҙеү өсөн яңы ҙур мәҙәни, сәйәси ынтылыштар, бөйөк эштәр, ҡаҙаныштар кәрәк булып сыға.

Шул уҡ ваҡытта ғалимдың милли тойғолары Башҡортостан менән генә сикләнеп ҡалмай. Ул ғөмүми төрөк донъяһы патриоты һәм ғалимы. Был тәңгәлдә лә уның яҙмышын дөрөҫ аңлау өсөн киң тарихи ҡараш талап итеү. XIX быуат аҙағы XX быуат башында формалашҡан башҡа бик күп күренекле башҡорт һәм татар зыялылары кеүек үк, Ә. Вәлиди ҙә, ғалим булараҡ, үҙәге Ҡаҙанда булған йәҙитселек хәрәкәтенең күренекле вәкиле. Икенсе яҡтан, ул бөйөк рус шәрҡиәтселәре йоғонтоһо аҫтында ғилми эш башлап, улар менән тығыҙ аралашып үҫкән ғалим һәм ул Ибн Фаҙлан ҡульяҙмаһын табып, тәржемә итеп, аңлатмалар биреп, Германияла баҫып сығарыуы менән Болғар тарихын өйрәнеүгә баһалап бөткөһөҙ мөһим өлөш индерә. Күренекле шәрҡиәтсе Карл Ян "XIX быуаттың һуңғы сирегендә һәм XX быуат башында йәшәгән рус тарихсылары мәктәбе йәшәүҙән туҡтаны, сөнки В. Бартольдтан (1869-1930) һәм В. Минорскийҙан (1877-1966) һуң был донъянан Зәки Вәлиди Туған (1890-1970) да китте",- тип юҡҡа ғына яҙмаған. Әхмәтзәки Вәлидиҙең иң бөйөк әҫәрҙәре Төркөстан тарихына, ғөмүми төрөк тарихына бағышланғанлыҡтан, уларҙы Урта Азия халыҡтары ла үҙ итергә хаҡлы. Ғалим аңлы ғүмеренең күпселек өлөшөн Истанбул университеты профессоры сифатында Төркиәгә, уның йәштәрен тәрбиәләүгә биргән һәм ул, һис шикһеҙ, Төркиәнең бөйөк тарихсыһы иҫәпләнә.

Ҡыҫҡаһы, Ә. Вәлидиҙең мираҫын аҡса йәки ер бүлгән кеүек бүлеү мөмкин түгел. Уның яҙмышы һәм әҫәрҙәре - бөтә донъя мираҫы һәм шундай кимәлдә булыуы менән ҡәҙерле, әһәмиәтле, был хәлдең иң гүзәл һәм шатлыҡлы күренеше. Ләкин күп илдәрҙең һәм халыҡтарҙың фәнни даирәләрендә оло һөйөү, киң танылыу яулаған, дөйөм иғтибар, ихтирам тапҡан ғалимдың тормошон һәм ғилми мираҫын тәрән һәм тулы баһалау, төрлө яҡлап өйрәнеү Башҡортостан ғалимдарының бурысы булып ҡала. Шәхес булараҡ, уның әҙәбиәттә һәм сәнғәттә тулы һынын кәүҙәләндереү Башҡортостан әҙиптәренең, рәссамдарының, скульпторҙарының иңенә төшкән изге вазифа. Мөҡәддәс бурыс. Был тәңгәлдә бик күп белем, талант һәм иждиһад талап иткән эштәр алда тора әле беҙҙең. Һәм был бер Вәлиди шәхесенә генә ҡағылмай. Үрҙә әйтеүебеҙсә, уның көрәштәштәренең, фекерҙәштәренең, үҙе әйткәнсә, арҡаҙаштарының рухтары-әруахтары ла быны көтә. Быға беҙ үҙебеҙ, киләһе быуындарыбыҙ мохтаж. Бындай изге эштәр башҡарырға ынтылыу, маҡсат итеп ҡуйыу ғалимдарыбыҙҙың да, әҙип һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренең дә ижади офоҡтарын киңәйтә алыр ине.

Өфө ҡалаһы үҙенең рельефы буйынса ысын мәғәнәһендә бөйөк скульпторҙар, архитекторҙар һәм рәссамдар эшләй торған урын. Ләкин был мөмкинлек менән хәҙергә бер Сосланбәк Тавасиев ҡына файҙалана алды һәм бөтә халыҡ ҡабул итә алырлыҡ, һоҡланырлыҡ һәйкәл ижад итте. Ә. Вәлиди генә түгел, Ш. Бабич, М. Мортазин кеүек мөһабәт шәхестәрҙең яҙмышы фәнни китап, роман, һәйкәл булып һынланырға бөтә яҡтан әҙер. Тик бындай эште башҡарырлыҡ белемле, талантлы, эшһөйәр, бөгөнгө көн кимәлендә фекер йөрөтөрлөк инициативалы йәштәр кәрәк.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

ЙӘҮКӘ ТЕЛЕФОН

# ҠАРАНТАУ МӘМЕРЙӘҺЕ...

## Юҡҡа ғына йылғаһы туңмай ятмайҙыр




**Әбйәлил районының "Йәүкә-пресс" агентлығы хәбәр итеүенсә, Ишҡол ауылы янындағы Ҡарантау мәмерйәһе һаман да үҙенең тикшереүсе ғалимын көтә, имеш. Мәмерйәнең серле һәм мөғжизәле булыуына бер нисә дәлил дә бар. Тәүге дәлил: ауыл халҡының мәмерйәне сит-яттарҙың иғтибарынан ситтә тотоп, һаҡлап килеүе.**

Ауыл янындағы Ҡарантау итәгенән башлана тиҙәр ул мәмерйәне. Шунда уҡ ҡышын да туңмай торған Ҡаран йылғаһы ағып ята. Был хәл тау атаһының йылғанан алыныуына туранан-тура ишара. Әгәр ҙә ошо дәлилгә мәмерйә эсендә бронза ат һынының табылыуын өҫтәһәк, мәмерйәнең әһәмиәте тағы ла арта төшә һымаҡ. Ошо төбәктең күренекле улы, йәмәғәт эшмәкәре, эшҡыуар, үҙешмәкәр тарихсы Фәтих Фазылов үҙенең "Кешелектең башҡа тарихы" тигән китабында бронза ат һыны кемдәрҙер тарафынан табылып, Ишҡолда әҙерләүсе агент булып эшләүсе Нурғәле Мөхәмәҙиевҡа тапшырылыуы хаҡында мәғлүмәт еткергәйне. Йылғаның ҡаран яһап туңмай ятыуы, тимәк, мәмерйә эсендәге берәр хикмәтле күренешкә бәйле булыуы бик ихтимал.

Ошо төбәк ҡарттарының һөйләүенә ҡарағанда, граждандар һуғышы ваҡытында ауыл халҡы ошо мәрмерйәгә йәшеренеп, күп кенә бәлә-ҡазаларҙан һаҡланып ҡалған. Ҡарантауға яҡын ғына урынлашҡан Имсәктауҙа ла бәләкәй генә мәмерйә бар. Унда инде ауыл халҡы Ҡыҙыл армия һалдаттарын аҡтарҙың эҙәрлекләүенән йәшереп тотҡан. Ҡарантау мәмерйәһе Игетимер йылғаһы буйынса өс саҡрымға һуҙылып, Тәпән, Мәхмүт ауылдарына тиклем барып етә. Хәҙерге ваҡытта мәмерйәнең ауыҙы емерелгән, унда инеү мөмкин түгел. Мәмерйәгә инергә тырышып ҡараусы Ишҡол ауылы егеттәре уның ауыҙында ҙур-ҙур таштарҙың ятыуы, мәмерйәгә ул таштарҙы шартлатып ҡына үтеүе мөмкин булыуы хаҡында һөйләй.

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ ишетеп ҡалды.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йорт производствоһы



Ижау башҡа халыҡтарҙағы кеүек үк биҙәлмәһә лә, үҙенең формаһы менән бик нәфис һәм матур булған. Өҫкә ҡаратып бөгөлгән тотҡаһына ниндәйҙер форма бирергә, биҙәргә тырышҡандар (**һүрәттәр**). Ижау башлыса ҡайын ороһонан йәки ҡайын тамырынан яһалған.




Ит, бутҡа һәм башҡа аҙыҡты һоҫоп алыу өсөн сүмес ҡулланылған (**һүрәт, *г, д***). Ҡалаҡты баҙарҙан һатып алғандар, ҡайһы бер урындарҙа уның менән бөтөнләй ҡулланмағандар. Башҡорттарҙың үҙҙәре яһаған ҡалаҡтары бик бәләкәй булған (**һүрәт, *в***). Һалма һөҙөп алыу өсөн һалма һалғыс тип аталған тишекле сүмес, йәиһә муйыл йәки балан ботаҡтарынан үрелгән ҡулланма ҡулланғандар (**һүрәт, *а, б***). Һуңғыһын ҡайһы бер ерҙәрҙә һурпа тип атайҙар.

Ағастан һауыт-һаба яһау менән һәр башҡорт шөғөлләнгән, әммә махсус рәүештә һатыу өсөн һауыттар яһаусы оҫталар ҙа булған. Соҡоп яһалған ағас һауыттарҙың тағы бер төрө һелкеүес тип атала, икмәк бешергәндә ондо ошо кәритәгә оҡшаған һауытҡа һалып торғандар (**һүрәт**).



Ағастан соҡоп яһалған һәм төбө айырым ҡуйылған һауыттар төрлө ҙурлыҡта булған. Йүкә, һирәгерәк ҡайын олононан соҡолған бейек һауыт силәк тип аталған. Уның бейеклеге 20-30 см-ҙан 1 м-ға, ә диаметры 10-40 см тиклем булған. Өҫкө өлөшөндә яһалған тишеккә бау үткәреп, тотҡа урынына ҡулланғандар.

Бал һаҡлау өсөн ҡулланылған уртаса ҙурлыҡтағы силәк батман тип атала. Уның мотлаҡ ҡапҡасы ла була. Элек батман иҫәпләү сараһы ла булып торған, XX быуат башында был атама менән бер бот бал һыймалы һауытты атағандар. Ҡымыҙ һәм айран әҙерләү, иген, он һаҡлау өсөн дә силәк ҡулланылған. Яҡынса 1 метр бейеклегендәге һәм бик бәләкәй диаметрҙағы (15-18 см) силәк май төшөрөү өсөн ҡулланылған һәм гөбө тип атала. Бейә һауыу өсөн ағастан соҡоп яһалған күнәктең артында ҡолағы, ә алдында һөт ҡойоу өсөн уңайлы уйымы була. Тәпән тип аталған ағас һауыттар ҙа силәк кеүек үк яһала. Улар һыу һауыты итеп тә, табынға ҡымыҙ, әсе бал биреү өсөн дә ҡулланылған. Әсе бал һалыу өсөн ҡапҡаслы һауыт - көрәгә булған, ул семәрләп биҙәлгән, бер-ике биҙрә һыймалы булған (**һүрәт**). Ағас көрәгәләр бал әсетеү һәм буҙа ҡойоу өсөн дә ҡулланылған.



✓ *Бында алып барған ҡаҙыныу һөҙөмтәләре шул тиклем ышандырырлык, был ҡаласыҡтың III быуаттарҙа уҡ булғанлығы, XVI быуаттарға тиклем йәшәгәнлеге, уның бик эре сәйәси, сауҙа үҙәге булғанлығына бер шик тә юҡ.*



**2007 йылда бер нисә ғалим "Өфө -II" ҡаласығы иseме аҫтындағы билдәле тарихи ҡомартҡының археологик ҡиммәтен асыҡлау маҡсатында бер нисә көн дауамында төплө тикшереүҙәр алып бара. Рәсәйҙең төрлө ҡалаларынан килгән бойондороҡһоҙ эксперттар, материалдарҙы ныҡлап өйрәнгәндән һуң, ҡаласыҡтың, ысынлап та, тарихи, мәҙәни һәйкәл булыуын таный һәм Башҡортостан Хөкүмәтенә ҡомартҡыны һаҡлау буйынса мөрәжәғәт яҙа. Ошо ғалимдар араһында билдәле археолог, Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты ғилми хеҙмәткәре, тарих фәндәре докторы Игорь Кызласов та (Мәскәү ҡалаһы) була. Ошо көндәрҙә археолог Өфөгә килде һәм беҙ уның менән осрашып, Игорь Леонидовичҡа бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

**▸ Һеҙ билдәле археолог, 200-ҙән ашыу ғилми хеҙмәт авторы. Гәзит уҡыусыларҙы үҙегеҙҙең фәнни тикшеренеү өлкәһенә ингән йүнәлештәр менән таныштырып китһәгеҙ ине?**

- Археология фәненең төп интригаһы - ер ҡатламдары аҫтында нимә ятҡанын алдан белеү мөмкинлеге булмауы, йәшәгән халыҡтың (йәғни башҡорт ырыуҙарының) тарихы менән яҡшы таныш булғанда, табылдыҡтарҙың ҡайһылары урындағы халыҡҡа ҡараған, ҡайһылары юҡ икәнен дә дөрөҫ билдәләп була. Шуға күрә лә Көньяҡ Урал, Башҡортостан Европа менән менән бергә кәңәшләшкәндән һуң, шундай ҡарарға килдек. Был иң юғары ҡатмарлыҡтағы һәм өйрәнеүе анһат булмаған ҡомартҡы - III-IV быуат тирәләрендәге бик боронғо ҡала ҡалдыҡтары. Социаль әһәмиәте буйынса бындай ҡомартҡының бөтә Рәсәйҙә, Көньяк Уралда ғына түгел, ә Көнсығыш Европала тиңе юк.

Ҡаласыҡтар табыла тора ул. Ләкин улар "Өфө-II" ҡаласығы кеүек бик оҙаҡ, меңәр йыллап йәшәмәгән. Башҡорт археологтарының бында алып барған ҡаҙыныу һөҙөмтәләре шул тиклем ышандырырлык, был ҡаласыҡтың III быуаттарҙа уҡ булғанлығы, XVI быуаттарға тиклем йәшәгәнлеге, уның бик эре сәйәси, сауҙа үҙәге булғанлығына бер шик тә юҡ. Ҡаласыҡта табылған алтын, көмөш әйберҙәрҙең ҡайҙандыр ситтән килтерелгәне, әлбиттә, бында йәшәгән кешеләрҙең әллә каль күренештең шаһиты булырмын, тип башыма ла килтермәгәйнем.

**▸ Тимәк, "Өфө-II" ҡаласығы, академик Нияз Абдулхаҡ улы әйтмешләй, бик әһәмиәтле ҡала булған...**

- "Өфө-II" ҡаласығының әһәмиәте Нияз Абдулхаҡ улы күрһәткәнгә ҡарағанда ла масштаблыраҡ. Мәжитов, йәмәғәтселек ҡабул итә алмаҫ, тип микән, бар нескәлектәрҙе күрһәтергә баҙнат итмәй. Эш шунда: бындай ҡомартҡы башҡа юҡ. Бәлки, ҡасан да булһа, "Өфө-II" кеүек ҡаласыҡ табылыр, археология фән булараҡ бер урында ғына тормай, яңы асыштар булып тора. Ләкин ул әле Көнсығыш Европала билдәле булған боронғо ҡалалар араһында тиңе булмаған тарихи ҡала. 4 метрлыҡ мәҙәни ҡатлам, ҡалала халыҡ бер туҡтауһыҙ III быуаттан алып XVI быуатҡа тиклем йәшәгән, тип иҫәпләүгә нигеҙ бирә.

Ул заманда тораҡ пункттары урындарын йыш алыштырған. Тимәк, иҡтисади яҡтан ғына түгел, сәйәси, мәҙәни йәһәттән дә бик ныҡ әһәмиәтле ҡала урынлашҡан бында. Башҡа ҡалалар Өфөгә ҡарағанда бер урында әҙерәк торғандар. Мәскәү, Киев, Новгород, Ҡаҙан боронғо ҡалалар иҫәпләнһәләр ҙә, уларҙың береһендә лә X быуаттан иртәрәк ваҡытҡа ҡараған мәҙәни ҡатлам юҡ. Был объекттың, "Өфө-II" ҡаласығының, уникаллеген аңлау, Европаны Урта быуаттарҙағы тарих буйынса күҙаллауҙы үҙгәртә. Сөнки иртә Урта быуат Европала IV быуаттың 70-се йылдарында ғына башлана. Ә бөгөнгө Өфө урынында булған ҡалала был осорҙо быуат ярымға иртәрәк тойомларға була.

4 метрлыҡ мәҙәни ҡатлам хаҡында әйткәндә, шуны билдәләр инем. Бындай ҡатламдарҙы Грециялағы, Урта Азиялағы антик ҡалаларҙа ғына осратырға мөмкин. Күреүебеҙсә, ҡала ҙур йылға ярында урынлашҡан. Ағиҙел йылғаһы, Днепр, Волга кеүек үк сауҙа өлкәһендә ҙур роль уйнаған.

# МӘҢГЕЛЕК МЕНӘН ДАУЛАШЫРҒА ЯРАМАЙ,

## йәғни тағы ла "Өфө-II" ҡаласығы тураһында



ында. Фараз итергә була, ләкин фараҙыңдың хәҡиҡәткә тап килеү-килмәүе ер ҡатламдарын аса, өйрәнә башлағас ҡына күренә. Мин Себерҙәге руна яҙмаларының тарихи-мәҙәни аспектын ныҡлап өйрәнәм. Тәбиғәттә, ҡаяларҙа, таштар араһында, ландшафттарҙа яңынан-яңы асыштарға юлығабыҙ. Табылған әйберҙәрҙең күпселеге рухи мәҙәниәткә ҡағылышлы материалдар. Себерҙә манехизм дине булған, ул XVI быуатҡа тиклем йәшәгән. Шуға күрә лә ҡая таштарында ошо тәғлимәткә ҡараған ғибәҙәт яҙыуҙарын күп осратырға була.

Иртә төрки халыҡтары тарихын да ныҡлап өйрәнәм. Был мәҙәниәттең тап ниндәй сиктәрҙә йәшәгәнлеген, уға ниндәй милләттәр ҡарағанлығын аныҡ ҡына әйтеп булмай. Ләкин беҙҙең ил археологияһы өсөн был бик отошло тема, сөнки быға тиклем бер кем дә уның менән ныҡлап шөғөлләнмәгән. Бөгөнгө көндә, һуңғы йылдарҙағы археологик табыштарға таянып, төрки халыҡтарының үҙаны, ҡараштары, мәҙәни сифаттары хаҡында күберәк һүҙ йөрөтә алабыҙ. Эйе, өйрәнәһе, тикшерәһе нәмәләр бик күп. Етмәһә, цивилизацияның даими үҫеше боронғолоҡҡа зыян килтереүе арҡаһында күп ҡомартҡылар үҙ тарихын, серен асмайынса юҡҡа сыҡҡан.

**▸ Башҡортостан, Көньяҡ Урал археологияһы хаҡында нимә әйтергә була?**

- Башҡортостан археологияһы менән башлыса китаптар, фәнни эштәр аша танышмын. Университетта уҡығанда бөтә төбәктәрҙе лә өйрәндем. Археологик йәһәттән Башҡортостан, Көньяҡ Урал үтә лә бай. Евразияны күҙ алдына килтереү өсөн был төбәкте өйрәнеү мөһим. Ул Ҡаҙағстан далаларындағы Тарбағатай һырттары кеүек үк, Урта быуаттарҙа, унан алдараҡ төрлө ҡәүемдәрҙең күсенеү юлында ята. Тимәк, ер ҡатламдарында бик ҡиммәтле тарих тупланған. Ошо йүнәлештә өйрәнергә тигән аныҡ маҡсат ҡуйып, археологик эштәр атҡарғанда, бик ҡыҙыҡ күренешкә тап булырға мөмкин. Әгәр ошо төбәктә быуаттар буйы Азияны киңерәк танып белеүгә аҫҡыс ул.

**▸ Ошо төбәктең мөһим асыштарының береһе булған "Өфө -II" ҡаласығы менән ҡасан ныҡлап таныштығыҙ?**

- Археология фәнендә шундай тәртип бар: айырыуса ҡатмарлы археологик материалды өйрәнгәндә бойондороҡһоҙ эксперттарҙы саҡырырға кәрәк. Башҡорт археологтары шулай итте лә. 2007 йылда беҙ, бер нисә ғалим, дүрт көн дауамында ҡаҙыныуҙар алып барылған урында ентекле тикшеренеү үткәрҙек. Һуңынан, эксперт-ғалимдар ниндәй тарафтар менән сауҙа бәйләнеше тураһында һөйләй. Ләкин ул алтын-көмөш әйберҙәрҙең ошонда, урында етештерелгәндәре лә бар бит - тимәк, бында алтын әйберҙәр етештергән оҫтаханалар булған. Ә ул замандарҙа алтын производствоһы бары тик юғары үҫешкән административ үҙәктәрҙә генә булған. Мәскәүҙән Өфөгә юлға сыҡҡанда, бында шундай уни-

*- "Өфө-II" ҡаласығының әһәмиәте Нияз Абдулхаҡ улы күрһәткәнгә ҡарағанда ла масштаблыраҡ. Мәжитов, йәмәғәтселек ҡабул итә алмаҫ, тип микән, бар нескәлектәрҙе күрһәтергә баҙнат итмәй. Эш шунда: бындай ҡомартҡы башҡа юҡ. Бәлки, ҡасан да булһа, "Өфө-II" кеүек ҡаласыҡ табылыр, археология фән булараҡ бер урында ғына тормай, яңы асыштар булып тора. Ләкин ул әле Көнсығыш Европала билдәле булған боронғо ҡалалар араһында тиңе булмаған тарихи ҡала. 4 метрлыҡ мәҙәни ҡатлам, ҡалала халыҡ бер туҡтауһыҙ III быуаттан алып XVI быуатҡа тиклем йәшәгән, тип иҫәпләүгә нигеҙ бирә.*



**✓ Австралияла үткәрелгән тикшеренеүҙәр "Өфө-II" ҡаласығының III быуатҡа ҡараған мәҙәни ҡатлам булыуын иҫбатланы. Әлеге ваҡытта "Өфө-II" ҡаласығы V быуатҡа ҡараған Византия тәңкәһе табылған Рәсәйҙең берҙән-бер ҡалаһы.**

Сауҙа яғынан үҫешкән ҡала булыуын табылдыҡтар ҙа һөйләй. Уларҙың географияһы Көнсығыш менән Көнбайышты тоташтыра, Кавказ, Византияны үҙ эсенә ала. Тарихта билдәле булған Урта быуаттың бөтә дәүерҙәре ингән унда.

Һәр ҡатламдың ҡалынлығы 3-5 сантиметрҙан артмай. Әлбиттә, тикшеренеүҙәр өсөн йоҡа ҡатламдар ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Ләкин шул уҡ ваҡытта улар ваҡытты билдәләргә, ҡаланың һәр бер дәүерен анығыраҡ күҙ алдына килтерергә мөмкинлек бирә. Шулай уҡ йорттарҙың балсыҡ менән һыланыуы һәр миҙгелдә айырым өйрәнеү юлын аса. Ҡаҙыныуҙарҙан күренеүенсә, ҡала янғындан һуң 3-4 тапҡыр янынан төҙөкләндерелгән. Архитектур-фортекцион мәктәп юғары кимәлдә. Ҡала кварталдарға бүленеп төҙөлгән, күперҙәр һалынған. Ғөмүмән, ҡаланың план-проекты бар. Бар ошо төҙөлөштәр IV быуатта уҡ булған. Ҡабатлап әйтәм, Көнсығыш Европала ундай ҡала юҡ. Тимәк, "Өфө-II" ҡаласығы яңы археологтар мәктәбен булдыра алырҙай, яңы ҡаҙыныу ысулдарын эшләү буйынса яңы мөмкинлектәр асҡан уникаль объект ул.

Әлеге ваҡытта ҡаланың бик бәләкәй өлөшө генә өйрәнелгән. Башҡа өлөштәрен өйрәнеү ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Һәр ҡатлам айырым өйрәнеүҙе талап итә. Ындай осраҡтарҙа көрәк менән ҡулланыу ҙа ҡомартҡыға зыян килтерә. Шуға күрә лә бысаҡ менән генә эшләргә кәрәк.

"Өфө-II" ҡаласығында бик күп көтөлмәгән асыштар йәшерелгәндер әле. Археология фәне Уралда ошондай ҡомартҡы табып булыуын көтмәгәйне лә. Тимәк, өйрәнгән һайын уның баһаһы артасаҡ ҡына.

**▸ Ни өсөн бәғзе бер тарихи ҡомартҡылар хаҡында тарихи, документаль фильмдар төшөрөлә, уларҙы өйрәнеү өсөн ҙур аҡса бүленә, ә икенселәре йәшәү өсөн көрәш алып бара?**

- Эйе, ҡайһы бер археологик ҡомартҡылар буйынса фильмдар төшөрөлә, улар дәүләт тарафынан ҙур аҡса ала. Икенсе ҡомартҡылар, ниндәй генә грандиоз булмаһын, "Өфө-II" ҡаласығы кеүек юҡҡа сығыу сигендә һәм йылдар буйы үҙенең әһәмиәтлелеген иҫбатлап көрәш алып бара. Был йәмәғәтселектән, етәкселектән аңына бәйле. Хәлдә ысынбарлыҡта аңлаусылар булғанда, барыһы ла һәүетемсә, бер ауырлыҡһыҙ тормошҡа ашырыла. Шуға ла аңды тәрбиәләү мөһим. Һәм иң яҡшыһы, йәмәғәтселекте, етәкселекте мифологиялар өлгөһөндә генә түгел, ә аныҡ материалдарға нигеҙләнеп инандырырға кәрәк. Археология - аныҡ материал.

Дәүләт абстракт төшөнсә түгел. Ул чиновниктар аппараты. Бер көн был чиновниктар аҡыллы, икенсе көн улар аҡылға һайыраҡ, өсөнсө көн бөтөнләй наҙан. Ошондай шарттарҙа нимә эшләргә? Ҡарашынды иҫбатлап, дәлилдәр килтерергәме? Мәҙәниәтҡә таянып, власҡа йоғонто яһарға тырышыу - гуманитар фәндәрҙең иңбашына төшкән иң ауыр шөғөл ул. Шуға ла күп осраҡта бер ни эшләп булмай. Ләкин ыңғай яҡтар ҙа бар. Хөкүмәт фәнни тематикаға ҡарағанда тиҙерәк үҙгәрә. Иң мөһиме, булған тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлап ҡала алһаҡ, киләһе быуындар уларҙы яҡшылап өйрәнә аласаҡ, моғайын.

**▸ Инҡар итеп булмаҫтай дәлилдәр була тороп та, Өфө 1574 йылда Иван Нагой тарафынан төҙөлгән, тип һаналып килә. Ни өсөн һаманға тиклем уның боронғолого танылмай ҡала?**

- Таныу, танымау тигәндә, йәмәғәтселек менән фән өлкәһен айырып ҡарарға кәрәк. Киң йәмәғәтселек "Өфө-II" ҡаласығы тураһындағы хәҡиҡәтте ҙур пропаганда, аңлатыу эше, рәсми рәүештә дәүләт кимәлендә раҫлауҙан һуң ғына таныуы ихтимал. Икенсе мәсьәлә - ғалимдар, фәнни донъя. Факттарҙы инҡар итеп, ҡаланы танымау мөмкин түгел. Күп ғалимдар, шул иҫәптән сит илдәрҙең фән эшмәкәрҙәре быны таныны. Сит ил лабораторияларында ентекле тикшеренеү эштәре алып барылды. Мәҫәлән, Австралияла үткәрелгән тикшеренеүҙәр "Өфө-II" ҡаласығының III быуатҡа ҡараған мәҙәни ҡатлам булыуын иҫбатланы. Әлеге ваҡытта "Өфө-II" ҡаласығы V быуатҡа ҡараған Византия тәңкәһе табылған Рәсәйҙең берҙән-бер ҡалаһы. Әгәр ындай алтын тәнкә ҡайҙалыр Италия яғында табылһа, бер хәл, ләкин уның Башҡортостан территорияһында табылыуы "Өфө-II" ҡаласығын фәнни донъя көтмәгән яңы кимәлгә - халыҡ, дәүләт-ара бәйләнештәр кимәленә күтәрә.

"Өфө-II" ҡаласығы археологик эштәрҙең полигоны булараҡ та әһәмиәтле. Бер ниндәй экспедиция ла ындай һәйкәлдә беҙҙең Рәсәй территорияһында тапмаған. Был Башҡортостан археологтарына ҡаҙыныу эштәренең яңы ысулдарын эшләү зарурлығын тыуҙыра. Шулай уҡ яңы, халыҡ-ара кимәлдәге археологик мәктәп булдырыу мөмкинлеге бирә. Сит илдән ғалимдар саҡырып, тәжрибә уртаҡлашырға форсат бирә һәм археология кеүек тар өлкәлә халыҡ-ара хеҙмәттәшлек итеү юлын аса. Эйе, айырым ғалимдарҙан тыш, фән донъяһы Өфөнөң боронғолоғон таныны. Ә рәсми яҡ кемдең яғын аласаҡ - уныһы уларҙың эше. Тарих бит рәсми кешеләр ҡарары менән булдырылмай, тарих ғалимдар тарафынан яҙыла.

Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйтер инем. Төҙөүселәр үҙҙәренең ниндәй ерҙе юҡҡа сығарғанын, ер ҡуйыны йәшергән күп нәмәләрҙең әһәмиәтен тулы кимәлдә аңламаясаҡ. Ләкин берҙе төҙөп, икенсене бөтөнләй тергеҙеп булмаҫтай итеп юҡҡа сығарырға ярамай. Ҡаласыҡ бер боҙолһа, ул башҡаса төҙөкләндерелмәйәсәк. Хатта фән өсөн ҡаҙыныу эштәре алып барған археологтар ҙа ҡаласыҡты төҙәтеп булмаҫтай итеп юҡ итә, ни тиһәң дә, бер тапҡыр алынған мәҙәни ҡатламдарҙы башҡаса тергеҙеп булмаясаҡ. Эйе, яңы йорттар төҙөргә кәрәк, ҡала төҙөкләндерелергә, матурайырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта "Өфө-II" ҡаласығын да һаҡлау мөһим. Бер нисә тиҫтә йылға уңайлыҡтар тыуҙырам тип, мәңгелек булған нәмәләрҙе юҡ итергә, үҙ халҡыбыҙҙың һәм башҡа халыҡтарҙың тамырҙарын ҡырҡып, мәңгелек менән даулашырға ярамай. Ҡыҫҡа ваҡыт мәнфәғәте өсөн мәңгелектең юҡ ителеүенән дә ҙурыраҡ фажиғә юҡтыр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хакас милләтле Мәскәү ғалимы тағы ла шулай тине: "Урта быуаттарҙа Европа картографтары ғәрәп сәйәхәтселәренең традицияһын киң ҡуллана. Ә ғәрәп картографияһында ҡаланы унда йәшәгән халыҡ исеме менән атау ҡабул ителә. Быға бик күп миҫалдар килтерергә була. Тимәк, Европа карта төҙөүселәре, шул иҫәптән Меркатор, әлеге Ағиҙел менән Ҡариҙел йылғалары ҡушылған урында Пашкерти (Башҡорт) ҡалаһын билдәләп, унда йәшәгән халыҡты күрһәтә..." Был хаҡта быға саҡлы ла күп ғалимдар әйтә килә, ҡул аҫтында ғына булған документтар ҙа шуны һөйләй. Әммә уны рәсми властар әлегә ҡабул итергә ашыҡмай. Ниңә икәнен бер улар ғына белә инде...**

**Азамат САЛАУАТОВ**
**яҙып алды.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҮҘЕМӘ ҮЛСӘП...

**Эйе, донъяға бөтән кеше күҙлегенән ҡарау анһат түгел. Беҙ һәммәбеҙ ҙә, тышҡы ҡиәфәттән былай, эске үҙенсәлегебеҙ менән бер-беребеҙҙән айырылабыҙ.**

Бер үк ваҡиғаларҙы төрлө кеше төрлөсә ҡабул итә, төрлөсә баһалай. Ниндәйҙер күренештән берәү разый, икенсе кеше уны инҡар итә, өсөнсөһө - битараф. Кемдер үҙенекенә оҡшамаған холоҡло йәки икенсе төрлө фекерле кешене бөтөнләй ҡабул итә алмай. Үҙе генә яңылыш фекерҙән дә азат, һәр саҡ хаҡ, тип инана ул. Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр, ике кеше низағҡа инеп, берәүһе икенсеһенә дәғүә белдергәндә, йыш ҡына үҙенең ғәҙәт-фиғелен ыңғай миҫал итеп күрһәтергә маташа, үҙенә оҡшаш ҡылыҡлы булырға саҡыра, үҙ өлгөһөндә "тәрбиәләргә" хаҡы бар тип иҫәпләй. Беҙ йыш ҡына бүтәндәрҙе үҙ ҡалыбыбыҙға үлсәп "бесергә", тәртәбеҙгә индерергә яҫҡынабыҙ.

Анатоль Франс (ысын исеме Анатоль Тибо), француз яҙыусыһы ошолай тип яҙа: "Музей ҡарарға килеүсе берәү шуға иғтибар итә: күргәҙмәгә ҡуйылған антик осор һындарының күбеһенең һыныҡ ере бар. Быға аптырамаҫҡа ла булыр ине, әлбиттә, ни тиһәң дә, боронғолоҡ, уларҙың беҙҙең көндәргәсә имгәнмәй килеп етеүе лә мөмкин түгел. Әммә тамашасыны икенсе нәмә ғәжәпләндерә: ни өсөндәр, башлыса ир-ат һынландырылған һындар ватылған, улай ғына ла түгел, һәммәһенең дә бер үк ағзаһы китек.

- Мин ватып сыҡтым уларҙы,- тип яуап бирә музей хеҙмәткәре тамашасыһының ҡыҙыҡһыныулы һорауына ҡаршы. - Ни өсөнмө? Беләһегеҙме,- тип унайһыҙлана бирәп аңлата ул үҙ ҡылығын, - музейға бит йәш ҡатын-ҡыҙ ҙа килеп йөрөй. Яланғас ир-аттың ҡайһы бер ағзаһын күреп, уларҙың... Нисек аңлатырға икән һеҙгә?.. Уларҙың ысынбарлыҡты яңылыш ҡуҙаллауы, һуңынан, сағыштырыу форсаты булһас, ир-аттан күңеле ҡайтыуы ихтимал...

- Ысынбарлыҡ тигәндә нимәне күҙҙә тоттоғоҙ һуң? Үлсәүе, нормаһы бармы ни уның?

Музей хеҙмәткәре, тыйнаҡ ҡына ҡарашын йәшереп, ошолай ти:

- Үҙемә ҡарап үлсәнем инде, сэр..."

**Тамара ҒӘНИЕВА.**

*ДАУАМ ИТЕП...*

# ҠАРАҢҒЫЛЫҠТЫ ӘРЛӘГӘНСЕ...

## үҙең бер сыра яндыр!

**Кәлимәне уҡығас, уны ошо юҫыҡтараҡ та дауам итке килде. Әле мин һөйләйәсәк осраҡ та һәр нәмәгә үҙе аңлағанса, үҙе белгәнсә баһа биреүсе йәки үҙе эшләмәгәнде башҡаларҙан тауҙай итеп талап итеүсе кешеләр "баҡсаһына таш ата" бит...**

...Редакцияға бер зыялы ир-егет килеп инде. Матур ғына яҙыша ла торған һәләтен иҫкә төшөрөп, уға тиҙ генә йәкләмә йөкмәтеп ҡуйырға ашыҡтым: "Фәлән темаға берәй материал яҙсы әле..." Кәләме шымараҡ булған кешеләргә шулай бәйләнә һала торған холҡом бар шул. Был иптәште лә йомошон йомошларға ла бирмәй, үҙемдең хәбәремә ылыҡтырҙым, шунда уҡ ул яҙырға тейешле тема ла телгә килде. "Әле ваҡытым юҡ, - тине ҡунаҡ. - Быға бер эште тамамлайым да, яҙышырға тотонасаҡмын. Фәлән Фәләноваға ҡаршы бер материал әҙерләйем, баҫып сығарһаң инде? Фәлән ойошманың етәксеһе адресына ла тоҙло-боросло бер мәҡәлә яҙырға уйлап йөрөйөм әле..." - тип теҙеп алып китте был. Тыңлап ултырҙым да, әйтә ҡуйҙым:"Ә ул ойошманың етәксеһе ни яғы менән оҡшамай һиңә, бынамын тигән итеп эшләп йөрөй?" "Етер, ул урында күп ултырҙы. Урынын башҡаларға бушатһын", - булды яуап. "Әйҙә, улайһа, һине ҡуйыйыҡ ул урынға..." - тинем ярһыуымды көскә тыйып. "Мин ул урынға дәғүә итмәйем..." - булды яуап. "Дәғүә итер инең дә, ҡулыңдан килмәҫ шул..." тигән һүҙҙәремде тел осона килһә лә әйтеп торманым. Тел әрәм итке килмәне...

Таныш һөйләшеүме? Эйе, ындай һөйләшеүҙәр йыш була беҙҙең арала. Быны тағы икенсе берәү менән булған осрашыу иҫкә төшә. Бер олатай 20-се ҡала башҡорт гимназияһындағы балаларҙы үҙ-ара русса һөйләшеүҙә ғәйепләй бер мәл. "Ә үҙеңдекеләр башҡортса һөйләшәме һуң?" - тигән һорауға: "Юҡ шул, һөйләшмәй, шулай тура килде инде..."- тип яуапланы.

Гәзитебеҙҙең бер һанында төрөк ғалимы Исмәт Бинәрҙең әйткәндәре тура килеп тора был осраҡҡа. Уның һөйләүенсә, самолетта башҡорт телен уҡытыуҙың әһәмиәте тураһында һөйләп килә бер милләттәш. Ә үҙе башҡортса һөйләшә белмәй. Исмәт Бинәрҙең һығымталары ла минең баштағы һығымталарыма ауаздаш:"Нисек итеп кеше үҙ тыуған телен белмәйенсә, уны пропагандалай ала? Беренсе өлгө - кеше үҙе. Үҙең тыуған телеңдә һөйләшмәй тороп, башҡаларҙы уны өйрәнергә өгөтләп буламы? Матур итеп ғаиләңдә башҡортса һөйләш, туғандарың, таныштарың, балаларың менән тыуған телеңдә аралаш. Әгәр һәр кем ошо ябай ғына ҡағиҙәне үтәһә, яңғырауыҡлы лозунгтарҙың кәрәге лә ҡалмай. Үҙ мөхитеңдә, үҙ ғаиләңдә, хатта урамда тыуған телеңдә аралашыуҙы бер кем дә тыймай бит..."

Был темаға әллә күпме миҫалдар килтерергә булыр ине бында. Ләкин сурытып тормай ғына шулай тип һығымта яһайыҡ: "Ҡараңғылыҡты әрләгәнсе, үҙең бер сыра булһа ла яндырсәле!" Башҡаларҙың ҙур эштәрен күрергә һәләтле түгелһең икән, үҙең башҡар бер бәләкәй генә эш. Тамсынан күл буласағы көн кеүек асыҡ бит...

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

## ҠАТНАШАЛАР:

**Ҡыш бабай**
**Ҡарһылыу**
**Яңы йыл**
**Тимерйән Бикйәнович - мәктәп директоры**
**Мораҙым Ҡылысович - директор урынбаҫары**
**Алып Байымов - Яңы йыл кисәһен алып барыусы**
**Артур - уҡыусы**
**Арыҫлан - уҡыусы**
**Йәмилә - уҡыусы**
**Эльбрус Ниғмәтуллин - Рәсәйҙең иң көслө кешеһе**
**Хәбир менән Сабир Сөләймәновтар, бокс буйынса донъя чемпиондары**
**Һаҡкол Ныҡторов - полиция капитаны**
**Саптар ҡола**
**Айыу**
**Бүре**
**Төлкө**
**Сысҡан**
**Яңы йыл шыршыһына төрлөсә кейенгән балалар, омонсылар һ.б.**

## Беренсе күренеш

**Клуб сәхнәһендә йә мәктәптең иркен спорт залында матур итеп биҙәлгән ҡупшы шыршы ултыра. Уға беркетелгән уйынсыҡтар, биҙәүестәр йым-йым килеп янып-һүнеп тора. Шыршы янында ҙур таш ята, шыршыға ҡуйылған уйынсыҡтар араһында сәғәт текелдәп эшләй. Ипләберәк ҡараһаң, шыршы тирмәгә лә оҡшаған. Ысынында, шыршы ҡоролған тирмәнең ҡанаттарына ылыҫлы ағас ботаҡтары беркетеп яһалған. Уны яһауҙың иң анһат юлы: түбә таҡтаға күп һандағы бауҙарҙың осон бергә тоташтырып нығытаһың да, бауҙарҙың икенсе остарын диаметры 10-15 метрлыҡ түңәрәк буйынса иҙәнгә беркетәһең. Артабан инде шыршы-тирмәгә ишек һәм ылыҫлы ағас ботаҡтары, уйынсыҡтар элергә генә ҡала.(Килештерә алмағандар баш ҡалабыҙҙың СССР-ҙың 50 йыллығы урамы һәм Комсомол урамдары киҫелешендәге "Июнь" сауҙа йорто ҡаршыһына ҡуйылған шыршыны килеп ҡараһын) .**

**Ҡыш бабай, Ҡарһылыу, Яңы йыл шыршы-тирмә янына инә.**

**Ҡыш бабай:** Иҫке йылдың һуңғы сәғәттәре һуға, дуҫтарым! Яңы йылдың килеүен дә иғлан итергә күп ваҡыт ҡалмай...

**Ҡарһылыу:** Эйе, Ҡыш бабай олатай, тик был байрам балаларҙың күңелендә быйыл да оҙаҡ һаҡланһын өсөн былтырғынан да күңеллерәк итеп үткәрергә ине. Былтырғы байрамды әле булһын һағынып иҫкә ала балалар.

**Яңы йыл:** Былтырғыһын мин күрмәнем, Ҡарһылыу апай. Нисек үтте һуң?

**Ҡарһылыу:** Былтыр Йылан йылын ҡаршы алғайныҡ бит. Йыланды бынау таштың аҫтына йәшерҙек тә, уны эҙләп тапмайынса, Яңы йыл килмәйәсәк, тип иғлан иткәйнек...

**Яңы йыл:** Шунан?

**Ҡарһылыу:** Шунан ней шул, Йыланды эҙләп, балалар хатта интернет селтәре аша бар донъяға иғлан да бирҙеләр. Балаларҙың фантазияһына ирек кенә бир икән. Шул тиклем күңелле булды. Юғиһә, балалар ялҡау, улар бер ни белмәй, тигән булалар. Уларҙың алдына ҡыҙыҡлы ла, мауыҡтырғыс та итеп маҡсат ҡына ҡуя бел.

**Яңы йыл:** Ҡыҙыҡ булған, таптылармы улар һеҙ йәшергән Йыланды? Нисек таптылар?

**Ҡарһылыу:** Үҙебеҙ ҙә әҙерәк ярҙам иттек инде...

**Яңы йыл:** Улай булғас, мин менеп килгән Саптар ҡоланы ла, әйҙә, шул таш аҫтына йәшерәйек.

**Ҡарһылыу:** Әллә инде, Ҡыш бабай-олатай нимә тип әйтер?

**Ҡыш бабай:** Берҙән, Саптар ҡоланы таш аҫтына йәшерергә ул Йылан түгел, икенсенән, был юлы былтырғы сюжетты ҡабатлаһаҡ, балаларға күңелле булмаясаҡ...

**Ҡарһылыу:** Ә нишләргә һуң беҙгә улай булғас, Ҡыш бабай-олатай?

**Ҡыш бабай:** Былай итәбеҙ...

**Ҡарһылыу:** Нимә эшләйбеҙ?

**Яңы йыл:** Ҡалайтабыҙ?

**Ҡыш бабай:** Һеҙгә шыршы нимәне хәтерләтә?

**Ҡарһылыу:** Шыршы шыршы инде, энәле, йәшел...

**Ҡыш бабай:** Ә формаһы буйынса нимәгә оҡшаған?

**Ҡарһылыу:** Нимәгә тип ни, бейек итеп ҡойолған кәбәнгә инде...

**Яңы йыл:** Анланым, олатай, шыршы башҡорт тирмәһенә оҡшаған бит, Ҡыш бабай-олатай! Ҡарале, Ҡарһылыу апай...

**Ҡарһылыу:** Шулай, ысынлап та, тирмәгә оҡшаған. Ҡыш бабай-олатай, һин шыршыны быйыл тирмәгә оҡшатып эшләгәнһең бит...

**Ҡарһылыу менән Яңы йыл ҡыуанышып, "шыршыҡай-тирмәкәй" тип һикерә-һикерә шыршы тирәләй һикереп бейергә тотона. Ҡыш бабай уларҙы туҡтата.**

**Ҡыш бабай:** Тс-с, ҡысҡырмағыҙ, ипләп, балалар ишетеп ҡалһа, байрам сценарийы боҙола. Хәҙер бына сәғәт уғын бер сәғәткә алға шылдырабыҙ ҙа, тирмә эсенә инеп йәшеренәбеҙ. Бына ошо ҡағыҙҙы таш аҫтына һалайыҡ та...

**Ҡарһылыу:** Унда нимә тип яҙылған һуң, олатай?

**Яңы йыл:** Минең дә унда нимә яҙылғанын белгем килә...

**Ҡыш бабай:** Ярай, был хаҡта тирмә эсендә һөйләшербеҙ. Тиҙерәк булайыҡ, хәҙер балалар килеп сығып, беҙҙең ҡайҙа йәшеренгәнде күреп ҡалһа, байрам йәме юҡҡа сыға...

**Ҡарһылыу шыршыға беркетелгән сәғәттең уғын бер сәғәткә алға шылдыра. Аҙаҡ Ҡыш бабай баһырау алып килеп, ерҙә ятҡан таштың бер яғын шаҡарып ҡалҡыта. Уға Яңы йыл ярҙамлаша. Ҡарһылыу Ҡыш бабай биргән ҡағыҙҙы таш аҫтына һала. Улар шыршы янына килеп, уның ишеген асып, шыршы-тирмә эсенә үтә.**




## Икенсе күренеш

**Шыршы-тирмә янына Тимерйән Бикйәнович, Мораҙым Ҡылысович сыға. Мәктәп директоры секунд һайын шыршыға беркетелгән сәғәткә ҡарап ала, ишекле-түрле йөрөй.**

**Тимерйән:** Ҡайҙа йөрөй һуң был Ҡыш бабай? Ниңә оҙаҡлай? Яңы йыл килеүгә ни бары ярты сәғәт ҡалды. Хәҙер балалар килһә, нимә тип яуап бирәбеҙ?

**Мораҙым:** Ҡарһылыуын күтәп ала алмайҙыр, Тимерйән Бикйәнович. Борсолмағыҙ, быйыл бит ҡар бик һуң яуҙы...

**Тимерйән:** Яуғаны ла ireп тик торҙо. Әллә ниндәй алама йыл булды был Йылан йылы.

**Мораҙым:** Алама түгел, Тимерйән Бикйәнович, аномальный...

**Тимерйән:** Күпте белһәң, тиҙ ҡартайырһың, Мораҙым Ҡылысович. Мин алама тип әйткәс, алама. Әйткәндәй, Яңы йыл кисәһен быйыл Алып Байымов алып барамы?

**Мораҙым:** Эйе...

**Тимерйән:** Ҡайҙа ул, ниңә шыршы янында түгел? Саҡыр...

**Үҙенең исемен ишетеп, Алып Байымов йүгереп килеп инә. Мораҙым менән улар саҡ бәрелешмәй.**

**Алып:** Эйе, мин һеҙҙе тыңлайым, Тимерйән Бикйәнович?

**Тимерйән:** Ҡайҙа йөрөйһөң, эт һуғараһыңмы, беләһеңме, Яңы йыл килеүгә күпме ваҡыт ҡалғанын? Ана, сәғәткә ҡара!

**Алып:** Тимерйән Бик... Минең сәғәт теүәл бер сәғәткә артта... Мин эт һуғарманым. Айыу, Бүре, Төлкө, Сысҡан... Эйе, улар менән сценарий буйынса репетиция үткәрә инек...

**Тимерйән:** Бына нимә, белеп ҡуй шуны. Ҡыш бабайҙың сәғәте иң дөрөҫө...

**Алып:** Аңланым, сәғәтемде шылдырам...

**Тимерйән:** Ә Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙы күрмәнеңме, Алып?

**Алып:** Юҡ. Күрмәнем, Тимерйән Бикйәнович...

**Мораҙым:** Тимерйән Бикйәнович, Яңы йыл менеп килә торған Саптар ҡоланы бөгөн урамда күреп ҡалдым. Ниңәлер, әйәре өҫтөндә Яңы йылды күрмәнем...

**Тимерйән:** Башта уҡ шулай тип әйтәләр уны. Бар, йүгер, Саптарҙы тотоп, бында алып кил. Бер аяғың - бында, икенсеһе - тегендә...

**Мораҙым:** Остом...

**Мораҙым сығып йүгерә. Мәктәп директоры үҙенә урын таба алмай.**

**Тимерйән:** Тәртип юҡ, тәртип. Ҡыш бабайҙың Ҡыш бабайы шулай Яңы йылды ҡаршылауға һуңлап килгәс, инде кемгә ышанырға? Балыҡ башынан, т-фү... (ул үҙенең башын тотоп ҡарай). Инде олатай булып бөткән кеше шулай үҙ бурысына яуапһыҙ ҡарағас, балаларға ни ҡала инде?

**Алып:** Тимерйән Бикйәнович, беҙҙең сценарий буйынса был мәлдә балалар шыршы тирәләй әйләнеп бейергә, Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙы ҡаршыларға тейеш...

**Тимерйән:** Тейеш нәмә күп булыр ул, Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуһыҙ барыбер Яңы йыл килмәйәсәк. Бар, саҡыр балаларҙы. Һис юғы уйнай торһондар.

**Алып сығып йүгерә. Мәктәп директоры тағы ла сәғәткә күҙ һала. Сәбәләнә. Ишекле-түрле йөрөй.**

## Өсөнсө күренеш

**Шыршы-тирмә янына кисәне алып барыусы Алып Байымов сығып баҫа. Бер аҙҙан күңелле музыка аҫтында бейей-бейей төрлө костюмдар кейгән балалар килеп сыға. Улар араһында Айыу, Бүре, Төлкө, Сысҡан да бар.**

**Алып:** Уйнағыҙ, йырлағыҙ, бейегеҙ, көлөгөҙ ҡәҙерле балалар! Быйылғы байрамды ла былтырғылай күңелле, иҫтә ҡалырлыҡ итеп үткәрәйек. Йылҡы йылын лайыҡлы ҡаршылайыҡ. Тимерйән Бикйәнович, әллә байрамды асып, берәр һүҙ әйтәһегеҙме?

**Тимерйән:** Һүҙе ҡасмаҫ, әйтелер. Башта Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙы ғына көтөп алайыҡ та...

**Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу исемен ишетеп ҡалаған балалар шундуҡ көйһөҙләнә башлай.**

**Артур:** Ҡайҙа һуң Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу? Беҙгә кем бүләк тарата, улай булғас?

**Арыҫлан:** Улар булмағас, быйыл Яңы йыл да килмәй инде...

**Йәмилә:** Ҡарағыҙ, сәғәткә ҡарағыҙ, Яңы йыл етеүгә ун биш минут ваҡыт ҡалды...

**Алып:** Тынысланығыҙ, балалар, хәҙер "Гөргөлдәк", "Йөҙөк алыш", "Һәпәләк" уйнайбыҙ. Кем алыҡ?

**Балалар бер тауыштан:** Юҡ, беҙгә Ҡыш бабай-олатай менән Ҡарһылыу апай кәрәк тәүҙә. Беҙ уларҙы һағындыҡ...

**Шул саҡ Мораҙым Саптар ҡоланы етәкләп алып инә.**

**Тимерйән:** Саптар, Яңы йыл һиңә атланып килдеме бында?

**Саптар:** Иһа-һа-һа... Эһе - эйе, Тиһи-тимерйән Биһикйәнович...

**Тимерйән:** Шунан ул ҡайҙа китте?

**Саптар:** Оһо-ошонда иһиинеп киткәйне. Улар өһөөсәүҙәр ине...

**Тимерйән:** Кемдәр? Кемдәр?

**Саптар:** Ҡыһыш Баһа-бай, Ҡарһы-һылыу, Яһы-ңы йыһыл. Ми-һин ты-һышта тоһороҙом. Сыһыҡ-сыҡҡандарым күһүр-күрмәнем...

**Тимерйән:** Мораҙым, Алып. Мәктәптә ғәҙәттән тыш хәл иғлан итәм. Ишек төбөнә, тәҙрәләргә һаҡсылар ҡуйығыҙ. Мәктәптән бер кем дә сыҡмай, бер кем дә инмәй... (**кеҫә телефонын алып шылтырата**). Алло, полиция, эйе, мәктәп... Алло... Ашығыс рәүештә килеп етегеҙ... Эйе... Юҡ, Ҡыш бабай, Ҡарһылыу, Яңы йыл юғалды. Юҡ, иремәгәндәр... Уларҙы урлағандар... Кем урлағанын белһәмме? Эйе, көтәбеҙ...

**Балалар ҡурҡышынан өйөлөшөп шомланып ҡала. Тимерйән Бикйәнович менән Мораҙым Ҡылысович Айыуҙы, Бүрене, Төлкөнө ҡыҫымға ала. Бер аҙҙан уларҙы бүлмәгә килеп ингән омонсылар алмаштыра. Полиция капитаны Һаҡкол Ныҡторов килеп инә.**

***✓ Унын ҡарауы, беҙ донъяға киң билдәле булған башҡорт батырҙарын ошо сценарий ярҙамында Яңы йыл байрамына килтерә алдыҡ. Сценарийҙың беҙ яҙған вариантының төп маҡсаты ла шунда...***

**Һаҡкол:** Уларҙы иң һуңғы тапҡыр кем, ҡасан һәм ҡайҙа күргән, Тимерйән Бикйәнович?

**Тимерйән:** Саптар ҡола, ип-ип... капитан әфәнде. Уға Яңы йыл менеп килгән...

**Һаҡкол:** (**Саптар ҡолаға**). Ҡасан һәм ҡайҙа күрҙегеҙ?

**Саптар:** Бе-һер сәһә-ғәт эһелек...

**Һаҡкол:** Иһаһайламай ғына һөйләгеҙ. Улар ҡайҙа осрашты һәм ҡайҙа китте?

**Саптар:** Миһин биһи-бит йыһыл-йылҡы маһа-лы, иһаһайламайса һөһөй-һөйләй аһал-алмайым...

**Һаҡкол:** Аңлашылды. Ҡысҡараҡ тот... Беҙҙең ваҡыт юҡ...

**Саптар:** Бе-һеҙ Яһы-ңы йыһы-йыл менән киһел-килдек. Беҙҙе Ҡыһыш бабай менән Ҡаһырһылыу ҡаршыланы. Улар оһошонда инеп китте...

**Һаҡкол:** Аңлашылды. Тимерйән Бикйәнович, һеҙ ни әйтерһегеҙ? Улар менән ни булыуы ихтимал? Кемдәрҙә шигегеҙ бар? Ғәйепләләр ошо залда, башҡа ерҙә түгел...

**Тимерйән:** Бындағыларҙан Айыуҙы, Бүрене һәм Төлкөнө генә әйтә алам. Башҡалар уларҙы урларға йә ашарға һәләтһеҙ...

**Һаҡкол:** Килтерегеҙ бында уларҙы!

**Омонсылар Айыуҙы, Бүрене, Төлкөнө Һаҡкол Ныҡторов янына елтерәтеп килтерә.**

**Һаҡкол:** Йә, урман кейектәре, йән көйөктәре, кемегеҙҙең эше был? Тайыш табан, ҡайҙа иттең уларҙы? Йүнле айыуҙар әллә ҡасан табанын ялап, етенсе төшөн күрә...

**Айыу:** Быйыл ҡар һуңлап яуҙы, яуғаны ла ирер тик тора. Шуға йоҡлай алмайым, капитан әфәнде. Бында килеп сығыуым да ана шул йоҡоһоҙлоҡтан. Ҡыш бабайҙың кәнфитенән дә ауыҙ итермен тигәйнем. Хәҙер ҡартайғас, балдан, кәнфиттән башҡа нәмәне ашамайым да...

**Һаҡкол:** Улай еңел генә минән ҡотолам, тимә, тайыш табан. Барыбер ғәйепләне табасаҡмын. Ә һин, Бүре, аҙау тешеңде һындырмаҫ борон әйтеп ҡал. Ҡайҙа иттең Ҡыш бабайҙы, Ҡарһылыуҙы, Яңы йылды?

**Бүре:** Бүренең ауыҙы ашаһа ла ҡан, ашамаһа ла ҡан. Ҡара бына эсемә, ай буйы тәғәм дә ризыҡ ҡапҡаным юҡ. Шуға күрә Ҡыш бабайҙың күстәнәсенән берәр һыныҡ там итеп, ошо байрамға килеп сыҡтым. Минән күрмәгеҙ, капитан әфәнде...

**Һаҡкол:** Суд, прокуратура, экспертиза барыһын да иҫбатлаясаҡ. Эсәк тә йоттороорбоҙ, ашҡаҙаныңдан анализ да алдырырбыҙ. Ә һин, юха йылан, Төлкөбикә ни әйтерһең?

**Төлкө:** Уларҙы мин ашаған, тиеүең көлкө, капитан әфәнде. Мин ашағандарҙың иң ҙуры тауыҡ, иң бәләкәйе - сысҡан. Бына, Сысҡан тотоп ант итәм (**ул ҡулына Сысҡанды ала**): мин Яңы йылды, Ҡарһылыуҙы, Яңы йылды...

**Һаҡкол:** Ярар, етәр... Ишетһен ҡолағығыҙ, миңә юҡҡа ғына Һаҡкол тигән исем ҡушмағандар, фамилиям юҡҡа ғына Ныҡторов түгел. Барыбер эштең осона сығасаҡмын. Айыуҙы, Бүрене, Төлкөнө ҡулға алығыҙ һәм алып барып бикләгеҙ...

**Төлкөнөң ҡулынан ысҡынған Сысҡан таш аҫтына инеп йәшеренә. Уны бер кем дә күрмәй ҡала. Шул саҡ шыршыға беркетелгән сәғәт ун ике тулыуҙы, Яңы йыл етеүҙе белдереп һуғырға тотона.**

**Һаҡкол:** Ниндәй тауыш һуң был? (**Берсә шыршылағы сәғәткә, берсә ҡулындағы сәғәткә ҡарай**). Минекендә теүәл ун бер. Тимерйән Бикйәнович, был ни хәл? Ниндәй спектакль?

**Тимерйән:** Спектакль түгел, ип... ип... капитан әфәнде. Ҡыш бабай сәғәте иң дөрөҫө. Хатта Мәскәүҙең Кремль сәғәте лә дөрөҫ булмауы бар...

**Һаҡкол:** Нимә тиһегеҙ? Бында һеҙҙең менән ваҡыт үткәргән мин алйот... (**Кеҫәһенән телефон алып шылтырата**). Ҡәҙерлем, эйе, был мин, ғәфү. Шампанскийҙы аса тор... Мин хәҙер...

**Тимерйән:** (**артынан эйәреп**). Ип...ип... капитан әфәнде. Ҡулға алынғандарҙы нимә эшләтергә?

**Һаҡкол:** Конституцияның юбилейы айҡанлы Рәсәй Президенты тарафынан барыһына ла амнистия...

**Тимерйән:** Амнистия? Енәйәтселәргәме?

**Һаҡкол:** Һеҙҙең ыңғайға әкиәт геройына әүерелеп, законды ла онотторһоң. Ҡыҫҡаһы, кешеләр өсөн сығарылған закондар йәнлектәргә ҡағылмай. Беҙ бында булманыҡ...

**Һаҡкол Ныҡторов йүгереп сығып китә. Уның артынан омонсылар ҙа эйәрә. Башҡалар барыһы ла үҙ урындарында тороп ҡала.**

## Дүртенсе күренеш

**Барыһы ла шул хәлдә ҡатып ҡалған. Бер саҡ улар янына баштарына ҡамсат бүрек, ҡулдарына бокс бирсәткәләре кейгән Хәбир, Сабир Сөләймәновтар, мускулдары бүртеп торған мыҡты кәүҙәле Эльбрус Ниғмәтуллин килеп инә. Барыһы ла "Һаумыһығыҙ!" тип иҫәнләшә. Уларҙы танып ҡалған мәктәп директоры йылмайып ҡаршы бара. Үҙҙәрен тиҙ арала балалар һырып ала.**

**Тимерйән:** Бәй, былар бит милләтебеҙҙең егерме беренсе быуат батырҙары Хәбир, Сабир, Эльбрус туғандар. Силәбе егеттәре. Байрамыбыҙға рәхим итегеҙ! Һорарға ла онотоп торам: бында һеҙҙе ниндәй елдәр ташланы?

**Эльбрус:** Кисә генә Хәбир менән Сабир Америкала донъя чемпионы титулын яуланы. Мине Арнольд Шварценеггер ҡунаҡҡа саҡырҙы.

**Тимерйән:** Арнольд Шварценеггер, тиһеңме? Ә нимәгә саҡырғайны?

**Хәбир:** Эльбрус яҡташыбыҙ бик етди кеше инде ул. Ул ауырлығы 170-әр килограмм тартҡан ике тимер сумаҙанды күтәреп, асфальт буйлап йүгереп ярышыуҙа донъя чемпионы исемен яуланы.

**Сабир:** Ҙур уңыштарға өлгәшеп, самолет менән ҡайтып килгәндә интернетты тоҡандырып ебәргәйнек, "Бәйләнештәр" селтәрендә һеҙҙең мәктәптән "SOS!" сигналы алдыҡ. Һеҙҙең мәктәп уҡыусылары менән әллә ҡасандан алып хатлашып тора инек.

**Эльбрус:** Шуға күрә самолеттан төшкәс тә, бәләгә ҡалған дуҫтарыбыҙ янына ашҡынып килеп еттек тә инде...

**Хәбир:** Ниндәй проблемағыҙ бар һуң һеҙҙең?

**Тимерйән:** Проблема тип проблема ла түгел инде. Әле яңы ғына Яңы йыл сәғәттәре һуҡты. Тик беҙгә, ниңәлер, Ҡыш бабай ҙа, Ҡарһылыу ҙа, Яңы йыл да килмәне лә ҡуйҙы...

**Эльбрус:** Ҡайҙа булған һуң улар? Яңы йыл сәғәттәре һуғыуға әле көмендә ун биш минут ваҡыт бар...

**Тимерйән:** Ҡыш бабай сәғәте иң дөрөҫө...

**Эльбрус** (**ҡулындағы сәғәткә ымлай**): Бына был сәғәтте миңә Арнольд дуҫым бүләк итте. Ул хатта секундтың йөҙҙән бер өлөшөнә тиклем дөрөҫ йөрөй. Ҡайҙа булдылар һуң улар, кем күргән, нисек?

**Алып:** Күҙ менән ҡаш араһында ғәйеп булдылар улар...

**Сабир:** Ғәйеп?..

**Хәбир:** Булдылар?..

**Тимерйән:** Бында мин Ҡыш бабайҙың бер шуҡлығы барлығын тойомлай башланым. Балалар, йә, әйтегеҙ, былтырғы йыл ул беҙгә ниндәй сюрприз уйлап сығарғайны әле?

**Артур:** Йыланды анау таш аҫтына йәшергәйне...

**Арыҫлан:** Шунан Йыланды таптыҡ...

**Йәмилә:** Таптыҡ та, тартып сығарҙыҡ...

**Тимерйән:** Туҡта, туҡта, иҫемә төштә. Артур, Арыҫлан, Йәмилә, һуңынан асыҡланыуынса, ул сюрприз-этлекте һеҙ уйлап сығарып, Ҡыш бабайҙы ҡотортоуығыҙ ҙа билдәле булды...

**Эльбрус:** Бында комиссар Катани башын ҡатырырлыҡ хәл, Хәбир, Сабир. Бөгөн Нью-Йоркта самолетҡа ултырғас, бер күҙем тартыша ине. Ошо шыршы байрамын күреүгә булған икән дә...

**Хәбир:** Вапшы супер, Америкаға барғас, ошо сюжетҡа берәр фильм төшөрөрбөҙ, Сабир...

**Сабир:** Иң тәүҙә Салауат Юлаев тураһындағы фильмды төшөрөп бөтәйек әле. Шунан быға тотонорбоҙ...

**Тимерйән:** Ҡыҫҡаһы, Артур, Арыҫлан, Йәмилә, һеҙҙең этлек был. Ҡайҙа Ҡыш бабай, Ҡарһылыу, Яңы йыл? Яңы йыл сәғәттәре һуғыуға ун минут ваҡыт ҡалды. Тиҙерәк булығыҙ, һуңлайбыҙ!

**Артур, Арыҫлан, Йәмилә берберећенә ҡараша.**

**Артур:** Тимерйән Бикйәнович, беҙ бер минут ҡына үҙ-ара һөйләшеп алабыҙ ҙа...

**Өсәүләп ситкәрәк китеп шыбырҙашалар ҙа кире шыршы янына киләләр.**

**Артур:** Ошо ташты күтәреп ҡарағыҙ...

**Арыҫлан:** Сер тап шул таш аҫтына йәшеренгән...

**Алып:** Эй, былтырғы сюжетты кире ҡабатлайбыҙ. Байрам мин яҙған сценарий буйынса китмәне. Барыһы ла былтырғыса...

**Тимерйән:** Йә, егеттәр, кемегеҙ алыҡ. Эльбрус туған, поезд, пароход һөйрәп йөрөгәнсе, әйҙә, ташты күтәреп ҡара...

**Эльбрус:** Хәҙер, һә, тигәнсе...

**Эльбрус үҙенә ярҙамлашырға ынтылған Хәбир менән Сабирҙы урындарында ҡалырға ымлай ҙа, ташты күтәрә. Мораҙым таш аҫтынан бер ҡағыҙҙы алырға тип барғанда унан ҡулына ҡағыҙ тотҡан Сысҡан килеп сыға. Ул еңеүсе ҡиәфәтендә тантаналы рәүештә Эльбрустың ҡулындағы таш өҫтөнә барып баҫа. Барыһы ла мөғжизә көткәндәй тынып ҡала.**

**Сысҡан:** Иғтибар, иғтибар, әле генә мин быйылғы Яңы йыл кисәһенең ҙур серен астым. Таш аҫтында ултырғанда ҡағыҙҙағы яҙыуҙы уҡыным. Яңы йыл кисәһенең Гран-прийы миңә тейеш. Призға миңә Төлкөнөң аяҡ-ҡулын бәйләп бирегеҙ. Мин уны ҡытыҡлап, яҙалап, барлыҡ сысҡан халҡының үсен алам...

**Мораҙым:** Бытырҙама, телеңә һалышма, бир бында ҡағыҙҙы...

**Мораҙым уның ҡулынан ҡағыҙҙы тартып алып алып барыусы Алыпҡа тоттора. Сысҡан таш өҫтөнән һикереп төшөп, Төлкөнө күтәреп ала.**

**Сысҡан:** Шыршы түгел - тирмә, Төлкө тотоп ант итәм...

**Сысҡанды күмәкләп тотоп алып, йығып һалып, ауыҙын томалайҙар. Барыһының да иғтибары Алыптың ҡулындағы ҡағыҙҙа. Алып ҡағыҙҙағы яҙыуҙы уҡый.**

**Алып:** Ҡәҙерле балалар, хөрмәтле ҡунаҡтар, уҡытыусылар, ата-әсәләр, шыршы-тирмәгә рәхим итегеҙ! Йылҡы йылын халҡыбыҙҙың изге йолаларына тап килтереп, шыршы-тирмәлә ҡаршылайыҡ!

**Сысҡан:** Әйттем бит...

**Барыһы ла аптырашта ҡала. Шул саҡ ҡурайҙа дәртле көй башҡарыла һәм шыршы-тирмәнең ишеге асылып китә. Унан шат йылмайып Ҡыш бабай, Ҡарһылыу һәм Яңы йыл килеп сыға.**

**Ҡыш бабай:** Шыршы-тирмәбеҙгә рәхим итегеҙ! Ҡәҙерле балалар, йәнлектәр, һеҙҙе тирмә эсендә Яңы йыл күстәнәстәре көтә. Унда бүләктәр барығыҙға ла етерлек...

**Тимерйән:** Төклө аяғығыҙ менән!

**Яңы йыл:** Йылҡы йылын йылы тирмәлә ҡаршылайыҡ!

**Алып:** Иҫке йылдың һуңғы секундтары һуға. Барығыҙҙы ла Яңы йыл менән!

**Яңы йыл сәғәте һуға. Барыһы ла шат йылмая. Балалар берәмберәм шыршы-тирмәгә инеп, үҙҙәренә тәғәйен бүләк-күстәнәстәрҙе алып сыға ла, шыршы тирәләп уйнарға, бейергә тотона. Ҡыш бабай шул саҡта ғына ҡунаҡтарҙы күреп ҡала.**

**Ҡыш бабай:** Артур, Арыҫлан, Йәмилә, беҙҙең сценарийҙа был ҡунаҡтар юҡ ине түгелме һуң? Кемдәр улар?

**Алып:** Ә минең сценарийҙа шыршы-тирмә лә юҡ...

**Тимерйән:** Үҙебеҙҙең батыр башҡорт егеттәре бит, Ҡыш бабай, Америкала батыр исемен яулап ҡайтып килгәндәрендә беҙгә һуғылдылар...

**Артур:** Ҡыш бабай-олатай, Тимерйән Бикйәнович, ә беҙҙә сценарийҙың өсөнсө варианты. Әле Яңы йыл кисәһе тап беҙҙең сценарий буйынса бара.

**Тимерйән:** Нисек һеҙҙең сценарий буйынса? Ярар, шыршы-тирмә Ҡыш бабайҙың идеяһы, ҡалғаны...

**Артур:** Беҙ тәүҙә Ҡыш бабай менән бер төптән булдыҡ та, аҙаҡ үҙебеҙҙең вариантты өҫтәп яҙҙыҡ. Олатай, ғәфү итегеҙ...

**Ҡыш бабай:** Зарар юҡ, балалар...

**Тимерйән:** Барыбер ҙә кәңәшләшеп эшләргә ине. Юғиһә, ана бит, полиция саҡырып, ниндәй оятлы хәлгә ҡала яҙҙыҡ. Ярар әле, ип... ип... капитан әфәнде быларҙың барыһын да Яңы йыл шаяртыуы икәнен аңлап, амнистия иғлан итте...

**Артур:** Уның ҡарауы, беҙ донъяға киң билдәле булған башҡорт батырҙарын ошо сценарий ярҙамында Яңы йыл байрамына килтерә алдыҡ. Сценарийҙың беҙ яҙған вариантының төп маҡсаты ла шунда...

**Эльбрус:** Төп маҡсаты, Артур, Арыҫлан, Йәмилә, аңатыбыраҡ һөйләгеҙ әле, зинһар?

**Артур:** Беҙ һеҙҙең Америкала ҙур еңеүҙәр яулап, бөгөн самолет менән Өфөгә килеп төшөрөгөҙҙө алдан белдек тә...

**Арыҫлан:** Һеҙҙең дуҫлыҡта нисек тоғро була алыуығыҙҙы ошо Ҡыш бабайҙарҙың юғалыуы сәбәбе менән бәйләп, "SOS!" сигналы ебәрҙек.

**Йәмилә:** Сөнки һеҙҙе үҙебеҙҙең Яңы йыл байрамында күргебеҙ килде. Беҙҙең һеҙҙе күрергә башҡа мөмкинлегебеҙ булмаҫ ине...

**Артур:** Һеҙ беҙгә ярҙамға килеп, үҙегеҙҙең ысын башҡорт батырҙары, ысын дуҫ икәнегеҙҙе иҫбатланығыҙ...

**Арыҫлан:** Ысын дуҫлыҡ тап ошондай саҡта һынала инде...

**Йәмилә:** Милләтәшеңә ярҙамсыл, терәк була белеү ҙә...

**Тимерйән:** Бына ниндәй спектакль килеп сыҡты. Мәктәбебеҙҙә шундай балалар уҡығанға ифрат шатмын!

**Эльбрус:** Кем уйлаған, кемдеңдер яҙған сценарийы буйынса Яңы йыл кисәһендә ҡатнашырбыҙ тип...

**Хәбир:** Сабир, беҙ иң тәүҙә ошо сюжет буйынса фильм төшөрөп ҡарайыҡ...

**Сабир:** Ризамын!

**Ҡыш бабай:** Һүҙгә бирелеп, онотолоп та торабыҙ: шыршы-тирмәгә рәхим итегеҙ, ҡәҙерле балалар, хөрмәтле балалар !

**Ҡарһылыу:** Төклө аяғығыҙ менән!

**Яңы йыл:** Йылҡы йылын йылы шыршы-тирмәлә ҡаршылайыҡ!

**Улар шыршы-тирмәнең эсенә үтә. Шыршы янында балаларҙың шат тауыштары яңғырап тора.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҮҘЕҢДЕ ҒӘҘЕЛ БАҺАЛА...
## йәшәүе еңелерәк булыр

■ Канада ғалимдары раҫлауынса, физик күнекмәләр өсөн ваҡыт арауығы мөһим түгел. Спорт менән көн һайын шөғөлләнәһенме, әммә аҙнаһына ике тапҡырмы, быныӊ айырмаһы юҡ, ти Торонто университеты ғалимдары. Иӊ мөһиме, кеше үҙенә тәғәйен физик ауырлыҡ нормаһын үтәп өлгөрөргә тейеш. Шуға ла уларҙың оҙайлығы 150 минут, йәки аҙнаһына 2,5 сәғәт булһа, яҡшыраҡ. Был норманы бер юлы үтәргә йәки өлөштәргә бүлгеләргә була.

■ Кеше үҙенеӊ яҡшы һәм кире сифаттарына ғәҙел булырға һәм уларҙы ҡабул итергә тейеш. Шул саҡта ғына ул икенсе яртыһы менән романтик мөнәсәбәттәр ҡора ала, тип белдерә Огайо штаты университеты (АҠШ) психологтары. Тикшеренеүҙәрҙә 62 пар студент ҡатнашҡан. Улар өс өлөшкә бүленгән һорауҙарға яуап биргән. Психологтар тәүҙә кешенеӊ үҙенә ҡуйған баһаһын һәм был саҡта ни тиклем ғәҙел булыуын тикшергән. Икенсе өлөштә студенттарҙың һөйгәндәренә булған мөнәсәбәте асыҡланған, уларҙың берберенә асыҡ булыуы, серҙәрҙеӊ булмауы баһаланған. Өсөнсө өлөштә иһә үҙ-ара мөнәсәбәттәр һәм үҙеңдеӊ шәхес булараҡ үҫешеӊ тураһында һүҙ барған. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, үҙенеӊ шәхесенә ғәҙел баһа биреүселәрҙеӊ шәхси тормошо ла яйлы барған, уҙҙәре лә үҫеш кисергән.

■ Окинавалағы Рюко университеты (Япония) тикшеренеүселәре асыҡлауынса, ҡәһүә ҡан әйләнешен яҡшырта. Йөрәк сәләмәтлеге өлкәһе эксперты профессор Масато Цуцуи билдәләүенсә, ҡәһүә йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән яфаланыусы ҡайһы бер пациенттарға ярҙам итә ала. Тикшеренеүҙәрҙә ҡәһүәне бөтөнләй тиерлек ҡулланмаған 22-30 йәштәге кешеләр ҡатнашҡан. Уларҙың бер өлөшө ғәҙәти ҡәһүә, икенсе өлөшө кофеинһыҙ ҡәһүә эскән. Һөҙөмтәлә, ябай ҡәһүәнеӊ артериаль ҡан баҫымын бер аҙ күтәреп, ҡан тамырҙары стеналары күҙәнәктәре эшмәкәрлеген арттырыуы билдәле булған.

■ Тәжрибәләр күрһәтеүенсә, көләү кешенеӊ ғүмерен оҙайта. Позитив кешеләр эштә лә, эргәһендәге кешеләр менән аралашыуҙа ла күберәк уңышҡа өлгәшә. Көләү - иммун системаһын көйләй, адреналин һәм допамин бүленеп сығыуға булышлыҡ итә. "Ул шулай уҡ эндорфин һәм энкефалин бүленеү механизмын әүҙемләштерә, - тип билдәләй Миландағы (Италия) психология фәндәре департаменты белгесе Клаудио Менкаччи. Шул уҡ ваҡытта статистика күрһәтеүенсә, хәҙерге заман кешеһе ата-бабаларына ҡарағанда һирәгерәк көлә. Corriere della Sera гәзите үткәргән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, 50 йыл элек кеше көнөнә уртаса 15 минут көлһә, бөгөн быға 5 минут ваҡытын бүлә.

■ Бөтөн донъя яман шеш тикшеренеүҙәре фонды белгестәре фекеренсә, йәйәү йөрөү яман шеш сирҙәрен булдырмау өсөн дә файҙалы. Көн һайын 45 минут физик әүҙемлек тә күптәрҙе был сирҙән ҡотҡара алыр ине, тип иҫәпләй табиптар. Медицина статистикаһы күрһәтеүенсә, даими әүҙемлек онкологик сирҙәрҙе булдырмауҙа мөһим урынды биләй. Физик әүҙемлек матдәләр алышыныу һәм организмдыӊ таҙарыныу процесын көсәйтә. Яман шештеӊ күп төрҙәре менән тап физик күнекмәләр ярҙамында көрәшергә була, тип белдерә ғалимдар.

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

**Ҡулым буйлап үрмәләп барған ҡырмыҫҡаны иплап кенә сиртеп ебәрҙем. Ай-һай, көс тә бар икән үҙемдә. Теге ҡырмыҫҡаны әйтәм, әллә ҡайҙа тәкмәсләп барып ятты. Әммә ул минеӊ шаяртыуҙы аңламаны, буғай. Ырғып тора һалып, минеӊ менән һуғышырға самаланы. Күкрәктәрен кирә биреп, эй йөрөнө, эй йөрөнө. Тора-бара тыныслана төштө. Шул арала бер ағас ботағын элэктереп тә алды. Алай һөйрәп ҡараны, былай этеп ҡараны. Күренеп тора, көсө етеңкерәмәй быныӊ. Шулай ҙа тырыша был. Бына бит, тип уйлап торам, ҡалай егәрле икән был бөжәк. Яңы ғына елкә төбөнә алды, ләкин ырғып торҙо ла эшкә лә тотоноп китте.**

# ҠЫРМЫҪҠАЛАРҒА ҠАРАП...
## кешенеӊ ялҡаулығына әсендем



Ә беҙҙеӊ менән ошондайыраҡ хәл була ҡалһа... Эш тураһында уйлап та бирмәҫ инек бит, әй. Валлаһи, күнел булғансы берҙе бишкә тулғандырыр инек.

Ошо бәләкәй генә йән эйәһенеӊ тормошо беҙҙеӊ өсөн бигерәк фәһемле, буғай. Әйткәндәй, уларҙыӊ тормошо беҙҙекенә оҡшап та ҡуя. Кеше кеүек, был бөжәктәр айырым йәшәмәй, ә йәмғиәткә ойошоп көн күрә. Улар бергә торлаҡ төҙөй, уны дошмандарҙан бергә һаҡлай, йәш быуынды тәрбиәләй. Беҙҙәге һымаҡ, уларҙа ла эш бүленгән. Кемдер аҙыҡ таба, кемдер уны ташый, кемдер һуғышсы, кемдер һаҡсы, кемдер полицай, кемдер "атай", кемдер "әсәй", кемдер әле "бәпәй" (улар эшләмәй), кемдер "уже бабай" (былары ла эшләмәй, шулай ҙа аҡыл өйрәтергә шәптәр), кемдер бала тәрбиәләй, кемдер торлаҡ төҙөй, кемдер уны сүпсарҙан таҙарта, һәм башҡа, һәм башҡа эштәр. Ҡыҫҡаһы, һәр кем үҙ эше менән мәшғүл.

Ҡырмыҫҡаларға тәбиғәт мөһим эш йөкмәткән. Улар үҫемлектәрҙе төрлө ҡоротҡостарҙан һаҡлай. Әгәр урманда ҡырмыҫҡа иләүҙәре, йәғни ғаиләләре, күп булһа, был урмандыӊ киләсәге бар, тип ышаныслы әйтергә була. Ҡырмыҫҡа ғаиләһе беҙҙекенә ҡарағанда күпкә ишле. Бер иләүҙә йөҙ меңдән алып миллионғаса ҡырмыҫҡа йәшәүе бар. Тәү ҡарамаҡҡа, иләүҙә ҡырмыҫҡалар тегеләй-былай бушҡа сабып йөрөгән кеүек. Әммә бында ҡаты тәртип урынлаштырылған. Иләүҙә һәр кем үҙ эше менән мәшғүл. Уларҙыӊ егәрлеге тураһында ошо иләүҙеӊ ҙурлығы ла күрһәтеп тора. Ошондай ҙур торлаҡ төҙөү өсөн уларға әллә күпме ботаҡ һынығы, тупраҡ бөртөгө, ваҡ таш ташырға кәрәктер инде. Иләү тыштан ғына тау өйөмөн хәтерләтеп тора. Әммә ул нисек етте, шулай төҙөлмәй, ә төп "архитекторҙыӊ" планы буйынса ғына төҙөлөү эштәре алып барыла. Ошо планға ярашлы иләү эсендә бихисап юлдар, бүлмәләр төҙөлә.

Шуныһы ҡыҙыҡ. Үҫмер ҡырмыҫҡаға, йәше ике-өс көн булғанына, һөнәр һайлау бурысы килеп баҫа. Ҙурайғас, кем булыуы уныӊ характерына бәйле. Бына, әйтәйек, ҡыйыу үҫмерҙәр һунарсы булып китә. Улар үҙ биләмәһен көн һайын тикшереп тора һәм саҡырылмай килгән ҡунаҡтарҙы ҡыуып ебәрә. Быйындай осраҡта ысынлап та уларға ҡыйыулыҡ кәрәк. Ә аҙыҡ табылды икән, тиҙ арала башҡаларға һөрәнләй һала. Һөрәнләй, тигәс тә, тамаҡ ярып аҡырып тормай инде. Улар башҡаларға мәғлүмәтте мыйыҡтары һәм еӊ ҡалдырыу ысулы менән бирә. Ошондай фарман иләүгә килеп етеү менән эшсе ҡырмыҫҡалар аҙыҡ ташырға сабып килеп тә етә һала. Иғтибар иткәнһегеҙҙер, иләүҙән төрлө яҡҡа һуҡмаҡтар тарала. Уларҙы ошо һунарсы һәм аҙыҡ ташыусы ҡырмыҫҡалар һала ла инде.

Шулай ҙа урманда тау һымаҡ бейек иләүҙәр һирәк осрай. Дошмандары ла етерлек шул уларҙыӊ. Ҡырмыҫҡа иләүен айыу туҙҙырырға ярата. Ошо бөжәктәр менән туҡланып көн күргән айыу төрөн бушҡа ғына ҡырмыҫҡа айыуы тип атамайҙарҙыр инде.

Бүреләр ҙә ҡурҡыныс иләү өсөн. Улар ошо "бәләкәй тау"ҙа ятып, тирә-яҡты күҙәтергә ярата. Һуңғы осорҙа урманда күбәйеп киткән ҡыр ҡабандары ла иләүҙе урап үтмәй. Улар уны һөргөсләп, ер менән тигеҙләп китеүсән (ҡабандарҙы әйтәм, берәй кәрәкле эш ыуләргә ҡушһаӊ, мороном аурта, тип тороп ине әле. Иләү нимә ул уға, яландағы ниндәй ҡаты ерҙе аҫтын өҫкә әйләндереп китә бит улар).

Ә быйна ҡайһы бер урман ҡоштары иләүҙә дауаланалар. Улар ҡанаттарын йәйеп һалып иләүҙә яталар, ә ҡырмыҫҡалар уларҙыӊ тәндәренән төрлө талпандарҙы, мамыҡ ҡорттарын сүпләйҙәр.

Әлбиттә, ҡырмыҫҡа тураһында күп яҙырға була. Әммә мине шуныһы аптырата. Иләүҙә миллионға хәтлем ҡырмыҫҡа йәшәй, ә берәү ҙә ҡырын төшөп, эшheҙ hыҙғырып ятмай. Бөжәктәргә генә хас сифат уларҙа нығ үҫешкән (дәрәҫәргә, бөтөнләй үҫешмәгән) - ҡырмыҫҡалар йыбаныуҙыӊ һәм ялҡаулыҡтыӊ нимә икәнен белмәй. Улар эшләйҙәр ҙә эшләйҙәр.

Был мәҡәләне уҡығас, ҡайһы берәүҙәр, миңә оҡшаған икән был бөжәктәр, тип көләп-көрһөнөп ҡуйыр. Юҡ шул, Аллаһы Тәғәлә ҡайһыбыҙға уҫлап, ҡайһыбыҙға тоҡлап биргән ялҡаулыҡ һәм йыбаныу тигән кире сифаттарҙы. Быйна уныӊ урынына "тел сарлау" тигәнде бер ҙә йәлләп тормаған. Уныһы күбебеҙҙә ҡолас буйы.

**Әғләм ШӘРИПОВ,**
**биология фәндәре кандидаты.**

ҒӘЖӘЙЕПХАНА

# МӨҒЖИЗӘЛӘР...
## аяҡ аҫтында



**Бынан бер-нисә ай элек Белорет районы Ғәбдүк ауылына командировкала булғаныбыҙҙа бер ихата эсендә постаментҡа ултыртылған үҙенсәлекле түңәрәк ташты күрергә тура килде. Уны табып килтергән Илшат исемле егет, "Күтәреп ҡарағыҙ әле", тип, беҙгә ҡарап хәйләле йылмайҙы. Әммә күтәрергә теләп, ташҡа барып йәбешеүебеҙ юҡҡа ғына булды. Самалап әйткәндә, ауырлығы 70-80 килограмм тирәһе тартҡан ташты күтәреү түгел, урынынан да ҡуҙғатып булманы. Серле таштыӊ ҡайҙан табылыуы һәм уныӊ менән бәйле мажара тураһында Илшат МӘХМҮТЙӘНОВ һөйләп бирҙе:**

АПТЫРАРҺЫҢ!



# ШҮЛГӘН-ТАШ ТУРАҺЫНДА...

## имеш-мимештәр

**Был көҙ "Шүлгән-Таш" ҡурсаулығы хеҙмәткәрҙәрен борсоусылар һәм... аптыратыусылар байтаҡ булды. Ҡурсаулыҡ телефондарынан ҡыҙыҡһыныусан, хатта асыулы шылтыратыуҙар өҙөлмәне: "Һеҙҙә ниндәй радиация? Ниңә кешеләргә унда йөрөтәһегеҙ?"**

Ҡайҙан барлыҡҡа килгән бындай хәбәр? Ә эш бына нимәлә булған икән. "Шүлгән-Таш"ҡурсаулығының рәсми сайтындағы йәйге экспедициялар тураһындағы ҡыҫҡа хәбәрҙә: "... спелеолог Ю.С. Ляхницкий тарафынан радиация аномалияһы табылған",- тип яҙыла. Аномалия мәмерйәнең иң алыҫ залдарының береһе - Упҡын залында күҙәтелә, нурланыш кимәле сәғәтенә 1,5 мкЗв., имеш.

Әйҙәгеҙ, был күренеште энәһенән ебенә тиклем тикшерәйек. Мәмерйәнең оҙонлоғо - 3328 метр. Упҡын залы мәмерйәгә инеү урынынан туранан-тураға бер километр алыҫлыҡта урынлашҡан. Унда барып етер өсөн бормалы-бормалы ер аҫты галереялары буйлап бер километр тирәһе атлап, имгәкләп, хатта шыуышып үтергә, аҙаҡ 40 метрлыҡ Ҙур ҡоҙоҡ буйлап төшөргә кәрәк. Ошо ҡоҙоҡтоң төбөндә, Упҡын залының һыу тамған урынында, юғары кимәлле гамма-нурланыш нөктәһе табыла ла инде.

Ә мәмерйәнең башҡа урындарында хәлдәр нисегерәк һуң?

Упҡын залының гамма-нурланыш нөктәһенән бер аҙ китеү менән уртаса нурланыш кимәле 0,15 мкЗв/сәғ. Мәмерйәнең башҡа өлөшөндә нурланыш кимәле 0,03-0,12 мкЗв/сәғ. тәшкил итә.

Хатта йәһәннәмдең үҙенә инергә әҙер тороусы спелеологтар тикшергән урындар ғына түгел, экскурсия маршруты ойошторолған урында нисек икән һуң хәлдәр?

Экскурсия маршрутының оҙонлоғо 373 метр: 150 метр тирәһе төпкә үтергә һәм кире сығырға кәрәк. Унда радиация кимәле 0,03 мкЗв/сәғ., ә инеү урынында- 0,08 мкЗв/сәғ. Был үтә лә хәүефһеҙ кимәл, хатта торлаҡ йорттарҙа рөхсәт ителгән иң юғары кимәлдән күпкә аҙыраҡ!

Хәҙер инде был күрһәткестәр нимә аңлатҡанын асыҡлайыҡ.

0,01 мкЗв/сәғ (микро-Зиверт сәғәт) биологик йоғонтоһо буйынса 1 мкР/сәғ.-ҡа (микро-Рентген сәғәте) тигеҙ.

Беҙҙең бүлкәттә асыҡ урында гәҙәти радиация фоны - 0,10-0,16 мкЗв/сәғ.

Торлаҡ йорттарҙа рөхсәт ителгән иң юғары кимәл- 0,2 мкЗв/сәғ.

Был күрһәткестәр менән сағыштырғанда 1,5 мкЗв/сәғ. нурланыш кимәле, әлбиттә, аҙ тип әйтеп булмай. Кемгә был радиация йоғонто яһай ала һуң? Упҡын залында йылына бер сәғәттән әҙерәк ваҡыт уҙғарған бер нисә ғалимға ғына йоғонто яһарға мөмкин. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк, Юрий Ляхницкий 50 процентҡа яңылышҡан көнкүреш радиометры менән ҡулланған.

Ә ҡайҙан ғауға ҡупты һуң?

Октябрь башында журналистар мәмерйәгә килеп, радиация хәүефлеген тикшереп ҡарағыбыҙ килә, тип аптыраттылар. Ҡурсаулыҡтың ғилми хеҙмәткәре аномалияның мөмкин сығанаҡтары тураһында аңлатып бирә һәм мәмерйәгә алып бара. Улар аҙаплана-аҙаплана Ҙур ҡоҙоҡҡа тиклем барып етәләр, артабан төшә алмайҙар һәм приборҙарын сығарып, үлсәй башлайҙар. Әлбиттә, күрһәткестәр норманан юғары булмай. Күрәһең, сенсация яһау теләге көслөрәк булып сыға: видеотаҫма һәм мәҡәлә интернет селтәренә һалына. Имеш, данлыҡлы "Шүлгән-Таш" мәмерйәһе туристарһыҙ ҡалыуы мөмкин, сөнки унда көслө тәбиғи радиация табылған.

Был "һары" хәбәрҙән ҡурсаулыҡ хеҙмәткәрҙәренең күҙҙәре маңлайына менде. Ғауға Роспотребнадзорға ла барып етте. Өфөнән тикшереү өсөн ике белгес ебәрелде. Радиация кимәле тағы үлсәнде. Һөҙөмтәлә, бөтөн мәмерйә буйынса нурланыштың уртаса күрһәткесе 0,1 мкЗв/сәғ., ә максималь күрһәткесе 0,21 мкЗв/сәғ. тәшкил итеүе билдәле булды. Шулай итеп, белгестәр радиация хәүефе тураһындағы бәхәстәргә нөктә ҡуйҙы.

Тағы ла шундай мәғлүмәт еткерге килә: әгәр һеҙ алыҫ араға самолетта осһағыҙ, яҡынса 20 мкЗв миҡдарында радиация алаһығыҙ. Флюорография үткәндә кеше организмы 1000 мкЗв миҡдар радиация ала. Тәмәке тартһағыҙ, үпкәләрегеҙҙе йыл һайын 15000 мкЗв миҡдар радиация менән "бүләкләйһегеҙ". Әммә был шаҡҡатырғыс мәғлүмәттән бер матбуғат та сенсация яһамай...

**Илдар ҒӘЙНЕТДИНОВ,**
**Эльвина БАЙБУРИНА,**
**"Шүлгән-Таш" ҡурсаулығы хеҙмәткәрҙәре.**

- Ағайым менән Йөйәк ауылынан төҙөлөш материалдары алып, Инйәр йылғаһы яры буйлап һалынған берҙән-бер ҡырсынлы юлыбыҙ буйлап Т-16 тракторында ҡайтып бара инек. Йылғала йыуылып, шымарып бөткән ялпаҡ таштары арҡаһында Оҙонташ тип аталған урынға килеп еткәйнек, башҡаларынан айырылып күренеп ятҡан ошо таш иғтибарҙы йәлеп итте. Тракторҙы һүндереп, таш эргәһенә килеп баҫтыҡ. Күпселек өлөшө түңәрәк, ә бер яғы кителгән табышыбыҙҙы мунса ташы итеп ҡулланырға ҡарар иттек - ауыр булғас, ҡулға килеп эләккән эш ҡоралдары ярҙамында бер-нисә киҫәккә онтап, тейәп алып ҡайтырға булдыҡ. Тик, ҡоралдарҙы эшкә ҡушҡайныҡ, таштың бер ере лә сатнаманы ла хатта. Ныҡлығын "һынағандан" һуң, бер кешенең көсө етмәгәнгә күрә, икәүләп көскә күтәреп һала алдыҡ трактор арбаһына һәм, килгән ҡунаҡтарға күрһәтербеҙ, тип, алып ҡайтып киттек. Ошо көндән башланды был серле таш йомғаҡтың "йондоҙло сәғәттәре". Ауылыбыҙға килгән бер кеше бынан ары беҙҙең ихаталағы "метеорит"ты ҡарап, фотоға төшөрә башланы.

Фараздарға килгәндә, күптәр уны ергә ҡолап төшкән күк есеме тип һанай. Беҙ үҙебеҙ ҙә күберәк ошо фекер яғына ауышабыҙ, таштың йомро форма алыуында йылғабыҙҙың ҡыҫылышы бармы икән, тип тә ҡуябыҙ. Йәнәһе, боҙ аҫтында тәгәрәп йөрөтөлөп, шымарып бөткән... Өсөнсө төркөм был таштың кемдер тарафынан махсус рәүештә эшкәртелгән булыуын тәҡрарларға тырыша. Был таштың килеп сығышы тураһында һорауҙар әлегә асыҡ килеш ҡала.

Бынан бер-нисә йыл элек ауылыбыҙҙа булып киткән Белорет ҡалаһы кешеләре ташты 25 мең һумға һатып алырға теләне. Интернет селтәрендә "ҡара баҙарҙа" метеориттарҙың (әгәр ҙә ул ысынлап та метеорт булһа) бәләкәй генә киҫәктәре лә ҙур суммаға һатылғанын иҫәпкә алғанда, беҙҙең таш тағы ла юғарыраҡ хаҡ менән баһаланырға тейештер, тип кәңәш биреүселәр ҙә бар. Әммә беҙ уны бөтөнләй һатырға уйламайбыҙ - ишек алдыбыҙҙы йәмләп, килгән ҡунаҡтарыбыҙҙы ҡыҙыҡтырып ултырһа, беҙгә шул да еткән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үҙешмәкәр тарихсы Иршат Зыянбирҙин фекеренсә, ташта боронғо яҙмалар эҙҙәре ҡалған булыуы ла мөмкин. Әммә был фаразды, ташты тикшереп, дәлилләргә кәрәклеген дә билдәләне. Таштың барлыҡҡа килеүенә ҡарата ла бөтөнләй үҙенсәлекле фекер яңғыратты: вулкан урғылған ваҡытта барлыҡҡа килгән "вулканик бомба" булыуы ла мөмкин, тигән ҡараш белдерҙе. Тикшеренеүсе фекеренсә, магма эсенә бөжәк эләкһә, эсе ҡыуыш йоморо таш барлыҡҡа килеүе мөмкин.**

**Байым РӘХИМЙӘНОВ яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Егерме икенсе көн

**1-се бүлек: Аҡыл. Еңеүгә ышанырға!**

Ҡеүәтле инаныу көсөгөҙҙә һәм үҙегеҙҙең йөкмһорап ятҡан иҫ китмәле һәләтегеҙҙә характерығыҙ, ныҡлығығыҙ һәм энтузиазмығыҙ менән берләштерһәгеҙ, теләгән бер эшегеҙҙә уңыш ҡаҙанырһығыҙ. Ә хәҙер программаның 3-сө көнөндә өйрәнелгән уңышҡа илтеүсе биш һорауҙы иҫебеҙгә төшөрәйек. Беренсеһе, "Бөгөнгө көнөмдө нисек шедевр итә алам?" тигәне айырыуса мөһим. Матур көнөгөҙҙөң һәр миҙгеленән шедевр яһау өсөн үҙ-үҙенә ҡаҡшамаҫ ышаныс һәм тормошоғоҙҙо фәҡәт шуға бағышлаған маҡсат булыуы кәрәк. Был юлда, билдәле, ҡатмарлыҡтар һәм кәртәләр килеп сығасаҡ, ләкин был - ысынбарлыҡ, был - тормош, бөтәһен дә еңеп сығырға мөмкин. Уларҙы һеҙ артабан үҫешегеҙ өсөн кәрәкле аҙымдар тип ҡабул итегеҙ. Килеп тыуған проблемаларҙы уйынға, ярышҡа әйләндерегеҙ.

**2-се бүлек: Тән. Һауаға сығып йөрөү**

Һауала йөрөү аҡыл өсөн аҙыҡ, һиллек һәм бәхет тойғоһо бирә. Бөгөнгө тиҙләнеш донъяһында беҙ һауала йәки дингеҙ яры буйлап йөрөү кеүек ябай ғына тормош рәхәтлектәре хаҡында бөтөнләй онотоп китәбеҙ. Ихтимал, зиннәтле ҡала яны клубтары, гольф уйнау өсөн яландары һәм күнекмә үҙәктәре булған курорттар беҙҙең өсөн булмаһа ла, йәйәүләп саф һауала йөрөүҙе беҙгә бер кем дә тыя алмай. Йәйәү йөрөй торған ғәҙәтегеҙгә бер ваҡытта ла онотмағыҙ. **Йәйәү йөрөү өсөн биш кәңәш: *а)*** тәбиғәттең матур бер урынын эҙләп табығыҙ. ***б)*** көндөң тыныс мәлендә бер үҙегеҙ йәйәү йөрөгөҙ; ***в)*** бөтөн хәсрәт һәм хәстәрлектәрегеҙҙе башығыҙҙан сығарып ташлағыҙ. ***г)*** мөмкин тиклем тәрәнерәк һулап, саф һауаға, тәбиғәт еҫенә, тирә-яҡты күҙәтеү ләззәтенә һәм һиллеккә шатланығыҙ; ***д)*** кәүҙәгеҙҙе тура тотоп, ныҡлы аҙымдар менән атлағыҙ.

**3-сө бүлек: характер. Популярлыҡҡа ун алтын аҫҡыс**

***а)*** кешеләрҙең исемдәрен шунда уҡ иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ, сөнки исемдәрен әйтеп мөрәжәғәт итеү бөтәһенә лә оҡшай; ***б)*** мөмкин тиклем йышыраҡ йылмайығыҙ һәм көләгеҙ. Хәтерегеҙҙә ике-өс төрлө йор һүҙ һәм тапҡыр көләмәс йөрөтөгөҙ; ***в)*** яҡшы тыңлаусы булығыҙ. 70:30 нисбәтен тоторға тырышығыҙ, йәғни 70 процент ваҡытығыҙҙы - кешене тыңлауға, тик 30 процентын ғына һөйләүгә тотоноғоҙ; ***г)*** үҙ-үҙегеҙҙе тота белеү һәләтен камиллаштырығыҙ. Тап ана шул һеҙҙең ныҡлы характер һәм өҫтөнлөк билдәһе булып тора ла инде; ***д)*** ныҡышмалы кешеләргә көн дә иғтибар билдәләре күрһәтегеҙ; ***е)*** кешегә бер ваҡытта ла, хаҡлы түгелһең, тип әйтмәгеҙ. Бәхәскә инмәгеҙ. Ни менәндер риза булмаған хәлдә лә тыныс ҡалығыҙ; ***ж)*** кешеләрҙе илһамландырығыҙ, рухландырығыҙ, улар араһынан үҙегеҙгә дуҫтар табығыҙ; ***з)*** бәйләнештәрегеҙҙе үҫтерегеҙ. Мөмкин тиклем йышыраҡ хаттар яҙығыҙ һәм шылтыратып тороғоҙ; ***и)*** үҙегеҙ белгән кешеләр араһынан иң намыҫлыны булығыҙ; ***к)*** алыуға ҡарағанда, күберәк бирегеҙ. Был һеҙгә өҫлөтә кире ҡайтыр.

**Робин ШАРМА.**



## 9 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы". Ток-шоу (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Оттепель". 9-я и 10-я серии. Драматический сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Познер" (16+).
01.15, 03.05 "Все или ничего" (16+).
03.00 Новости.
03.20 "Драконий жемчуг: эволюция" (12+).

### РОССИЯ-1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "1000 мелочей".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал(12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Тайны института благородных девиц". Сериал.
17.00 "Вести".
17.10, 19.40 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Тайны следствия". Сериал(12+).
18.35 "Прямой эфир" (12+).
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-12" (12+).
01.15 "Американская трагедия". Драматический сериал.
02.40 "Лесной воин". Приключения (16+).
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Мәүлетбай Ғәйнетдинов (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина". "Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев" (6+)
18.00 Дилә Булгакова һүҙҙәренә йырҙар (6+)
21.00 "Кис ултырып". "Өс егет" (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Новости недели" (на башк. яз.) (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Новости недели" (16+).**
**11.45 "Медаль" (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45, 16.15 "Учим башкирский язык".**
**13.00 "Бахетнамэ".**
**13.45, 05.30 Концерт "Мелодии души".**
**14.45 "Герои спорта" (6+).**
**15.15 "Царь горы".**
**15.45 "Физ-ра".**
**16.30, 21.30 Новости (на русс. яз.).**
**16.45 "Знаменосец Победы".**
**17.30 Новости культуры (на русск. яз.).**
**18.00 "Үткән ғүмер" (6+).**
**18.45 "Телецентр" (на башк. яз.).**
